ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кескә Өфө

25-31 июль (майай) 2025

№29 (1173)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туған телемдә уҡыйым!**



2

**Идарасылар тәрбиәләнә**



4

**Һеҙҙә утын киҫелһә... беҙҙә юнышҡы төшә**



6

**Байһаҡалда ял итегеҙ!**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Әгәр ҙә кешеләрҙең барыһы ла бер юлы аҡылдан яҙһа, улар бик тыныс, һыйышып йәшәр ине.***

***(Фрэнсис Бэкон).***

*БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*

# БАШҠОРТОСТАН ДАНЫ - ШҮЛГӘНТАШ,

## йәки эпостарға торорлоҡ таш һәйкәл ул

**Быйылғы йылдың 12 июле хәҙерге Башҡортостан тарихына бик тә күркәм, затлы һәм ҡыуаныслы дата булараҡ теркәлеп ҡуйыласаҡ. Боронғо башҡорт эпостары менән бәйле Шүлгәнташ мәмерйәһе, атап әйткәндә, уның залдарына таш быуаты (палеолит) эпохаһы кешеләре төшөргән һүрәттәр ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мәҙәни һәм тәбиғи мираҫы исемлегенә индерелде. Әлегә тиклем ошо исемлектә Рәсәйҙең 33 объекты бар ине. Был ҡаҙанышты мәҙәниәтебеҙ өлкәһендәге оло еңеүгә тиңләп була. Ошо проектты ғәмәлгә ашырыуға үтә тос өлөш индергән милләттәшебеҙ - Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Әхмәҙи улы ҒӘЙНУЛЛИН менән әңгәмәбеҙҙе уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

**Хөрмәтле Данир Әхмәҙи улы! Һәр бер эштең, һәр проекттың башы, старт алған мәле була. Шүлгәнташыбыҙҙы бөтөн донъя кимәлендә танытыу проекты (ЮНЕСКО аша) нисегерәк башланып китте, ниндәй шарттарҙа бойомға ашырылды?**

- 1959 йылда тикшеренеүсе А.В. Рюмин Шүлгәнташ мәмерйәһендә (ул саҡта - Капова пещера) беренсе булып палеолит эпохаһы һүрәттәрен таба. Барлығы 170 һүрәт теркәлә. Был донъя кимәлендәге сенсация була, сөнки әүәл ғалимдар Уралда таш быуат кешеләре йәшәүен инҡар иткән булған. Шүлгәнташ - ер йөҙөндәге уникаль мәмерйәләрҙең береһе ул.



Боҙҙар ҙа баҫа алмаған Урал таүҙары тыуып ҡына килгән кеше аңында сакраль сағылыш таба, Шүлгәнташ мәмерйәһе лә үҙенә күрә бер сакраль урынға әйләнә. 20 мең йыл әүәл кешенең аңы, зиһене ныҡлап үҫешә, уның тәбиғәткә, хайуандарға айырым ҡарашы формалаша башлай. Элек үҙен тәбиғәтттән айырып ҡарай алмаған кеше донъяла кем булыуын асыҡларға теләй: ул үҙенең башҡа тереклектәрҙән айырымлығын күрә. Иң мөһиме - тап ошо дәүерҙә уның тәү ижади ҡеүәһе формалаша башлай, ә был сәнғәткә илтә торған юл. 36 - 20 мең йылдар элегерәк Испанияның төньяғында, Францияның көньяғында йәшәгән боронғо кешеләр шулай уҡ мәмерйәләрҙә төрлө һүрәттәр төшөргән. Хайуан һүрәттәре менән бер рәттән, төрлө геометрик фигуралар - трапециялар, өсмөйөштәр һ.б. төшөрөлә. Тикшеренеүселәр Европа мәмерйәләрендәге һүрәттәр менән беҙҙең Шүлгәнташтағы һүрәттәрҙең бер иш булыуына иғтибар итә.

Әйтергә кәрәк, Рәсәйҙә лә, Көнсығыш Европала ла беҙҙең Шүлгәнташ кеүек кешелектең таш быуат дәүере хаҡында мәғлүмәт һаҡлаған башҡа мәмерйә юҡ. Совет осоро тарихсылары, археологтар ошо тәбиғи-мәҙәни объекттың ни тиклем мөһим булыуын, уны күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға кәрәк икәнен белә һәм уның менән сикһеҙ ғорурлана ине. Әлбиттә, Башҡортостандағы уникаль мәмерйә тураһындағы мәғлүмәт барса донъяға тарала, уны үҙ күҙҙәре менән күрергә, өйрәнергә теләгән ғалимдар ҙа күп була. Беҙҙең бәғзе бер зыялыларыбыҙ Шүлгәнташты дәүләт тарафынан һаҡлау идеяһын күтәреп сыға, әммә Совет осоронда ла, 90-сы йылдарҙа ла мәмерйә ҡарауһыҙ ҡала бирә.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЮЛДАР ҘА ЗАМАНСА ХӘҘЕР



**16 июлдә М-12 "Көнсығыш" федераль автомобиль трассаһының Башҡортостан аша үткән Дүртөйлө - Ачит участкаһын сафҡа индереү тантанаһы булды.**

275 километр оҙонлоғондағы юлдың 140-ы Дүртөйлө, Борай һәм Тәтешле райондары буйлап һалынған. Былтыр декабрҙә, реконструкция эшләнгәндән һуң, яңы трассаның бер өлөшө булып киткән 65 километр аралыҡтағы М-7 юлы участкаһы сафҡа ингәйне.

Яңы юлдан хәрәкәтте Рәсәй Президенты Владимир Путин һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров асты:

- "Дүртөйлө - Ачит" яңы автомобиль юлы - М-12 "Көнсығыш" трассаһының мөһим өлөшө. Ул Санкт-Петербург һәм Мәскәүҙе Уралдың баш ҡалаһы, Рәсәйҙең алдынғы фәнни, сәнәғәт һәм мәҙәни үҙәге булған Екатеринбург менән бәйләне, - тине ил етәксеһе үҙенең тәбрикләү һүҙендә. - Трассаның бөтә оҙонлоғонда бер светофор ҙа ҡуйылмаған, шул арҡала тиҙ йөрөшлө юлда Екатеринбургтан Мәскәүгә тиклем барыу ваҡыты ике тапҡырға тиерлек ҡыҫҡара. Һөҙөмтәлә автотранспортта йөрөү уңайлыраҡ һәм хәүефһеҙерәк буласаҡ, пассажирҙар ағымы һәм йөк ташыу күләме артасаҡ, эске туризм үҫеше ҡеүәтле стимул ала, илебеҙҙең иҫтәлекле урындарына барыу уңайлыраҡ буласаҡ.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ТУҒАН ТЕЛЕМДӘ УҠЫЙЫМ!




**Тыуған илебеҙ Рәсәйҙе борсоған мәсьәләләр бөгөн кесе ватаныбыҙҙы, Башҡорт донъяһын да, шундай уҡ дәрәжәлә борсой. Халыҡ-ара кимәлдә Рәсәйҙең суверенитетын нығытыу, абруйын ҡайтарыу, тиҙерәк тыныслыҡ, именлек урынлаштырыу, иҡтисадты үҫтерәү һәм шулар менән бер рәттән, туған телдәрҙе һаҡлау бурысы ил сәйәсәтенең өҫтөнлөклө мәсьәләләренең береһе тип ҡарала.**

Яныраҡ ҡына РФ Президенты Владимир Путин тел сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлаусы указға ҡул ҡуйҙы. Уның маҡсаты - дәүләт теле булараҡ, рус телен һәм шул уҡ ваҡытта Рәсәй халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереү һәм күтәрмәләү бурысын тормошҡа ашырыу. Ил Президентын ҡайны бер сит дәүләттәр тарафынан рус теленең ҡулланыу даирәһен сикләргә маташыуҙар менән бергә, Рәсәй халыҡтары телдәрендә аралашыуҙарҙың да кәмеүе бик борсой. Ошо йәһәттән документта Рәсәй республикаларының дәүләт телдәрен һәм башҡа халыҡтар телдәрен һаҡлау буйынса Милли һүҙлек фондын Рәсәй халыҡтары телдәрендәге мәғлүмәттәр менән тулыландырыу, дәүләт телдәре буйынса мәктәп дәреслектәре сығарыу, туған телдәрҙе уҡытыу ысулдары, кириллица клавиатураһында Рәсәй халыҡтары телдәрендәге хәрефтәр өсөн махсус урын бүлеү кәрәклеге хаҡында әйтелә. Күренеүенсә, Рәсәй дәүләте тарафынан илебеҙ халыҡтары телдәрен яҡлау, үҫтереүгә булышлыҡ итеү ниәте был. Ул тағы ла шунан да күренә: Владимир Путин йыл һайын 8 сентябрҙә Рәсәй халыҡтары телдәре көнөн үткәрергә тәҡдим итте.

Был турала мин ни өсөн ентекләп һөйләйем? Башта шуны әйтергә теләйем: Рәсәй халыҡтары телдәренә, шул иҫәптән, башҡорт теленә ҡарата ла, юғары кимәлдә яҡлау, һаҡлау, үҫтереү гарантиялары бирелгән бер ваҡытта, үҙебеҙҙә нишләптер, гел генә "тел бөтә", "башҡорт теле ҡыҫырыҡлана" тигән зарланыуҙар ишетергә тура килә. Ул кешеләргә шулай тип өндәшке килә: әйтегеҙ әле, кемдәр ғаиләләрендә балалары һәм бигерәк тә ейән-ейәнсәрҙәре менән саф әсә телебеҙҙә һөйләшә? Кемдәр башҡорт телендә сығып килеүсе гәзит-журналдарҙы өйөнә алдырып, балалары менән бергәләшеп уҡый? Ундайҙар йөҙ башҡортҡа берәү бар микән? Әйткәндәй, балаларға ил тарихын, мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнеүе туған теле аша яҡшыраҡ, еңелерәк бирелә, ти уҡытыусылар. Туған телен ихтирам итәме һәм "Теле юҡтың - иле юҡ" тигән халыҡ аҡылын аңлар дәрәжәләме бөгөнгө балалар? Ғөмүмән, бөгөн ата-әсәләрҙең үҙҙәрен нисек итеп телһөйәр балалар тәрбиәләргә өйрәтергә кәрәк. Сөнки быуындар алмашына барып, хәҙерге ата-әсәләрҙең үҙҙәренең туған тел ҡәҙере, рухи ҡиммәттәребеҙ мәсьәләләренә ҡараштары Советтар иле тарҡатылған, милли идеялар юҡҡа сыҡҡан осорҙа формалашҡан бит. Шуның өсөндәр ҙә, бәлки, күп кенә ғаиләләрҙә бөгөн рухи ҡиммәттәргә ҡарағанда матди файҙа эҙләү, аҡса эшләү хәстәрлеге өҫтөнлөк итә. Быны гәйепләп тә булмай: тормош шарттары ла шуны талап итә, тик шулай ҙа был донъяға кем булып тыуғанбыҙ, кем булып һәм кемдәр араһында, ниндәй мөхиттә йәшәйбеҙ - бына шуны һәм, әлбиттә, ата-бабаларыбыҙ рухын да оноторға хаҡыбыҙ юҡ.

Балаларға улар тыуғандан алып тел тәрбиәһе биреү, тел мәҙәниәтен һеңдереү туранан-тура ғаиләләрҙең бурысы булһа, бөгөн беҙҙе борсоған икенсе мәсьәлә - мәктәптәрҙә туған тел уҡытыу торошо. Уның өсөн сәғәттәр былай ҙа әҙ ине, бөгөн килеп, Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына (ФГОС) үҙгәреш индерелә, туған телгә бүленәсәк сәғәттәр тағы ла кәмейәсәк, тип ишеттем. Был хаҡта яныраҡ ҡына Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Мәрйәм апай Бураҡаева ла үҙенең социаль селтәрендә борсолоу белдереп яҙып сыҡты: " ...Тимәк, хәҙер программаларҙы камиллаштырыу хәстәре түгел, телебеҙҙе ҡурсалау мәсьәләһе килеп баҫа. Минең туған телемә хәүеф янай икән, битараф ҡала алмайым, ФГОС-ҡа үҙгәреш индереүгә ҡырҡа ҡаршымын",- тип яҙа ул.

Халыҡтар йәшәй икән, уларҙың телдәре лә йәшәй. Улар үҙҙәренә әсә һөтө менән һеңгән туған телдәренән айырылғыһыҙ. Рәсәй беҙҙең оло илебеҙ. Илебеҙҙә халыҡ-ара аралашыу теле булған, дәүләт теле статусын йөрөткән рус телен яҡшы беләбеҙ, яратып өйрәнәбеҙ бит, тимәк, уның менән бер рәттән кесе ватаныбыҙҙың дәүләт теле статусы булған башҡорт телен дә белергә, өйрәнергә бурыслыбыҙ. Сөнки Рәсәй менән Башҡортостан айырылғыһыҙ, улар бай тарихлы, оло һынау йылдарын гел бергә үткән, бергәләп еңеү яулаған. Бөгөн дә беҙ бергәлек, берҙәмлек, дуҫлыҡ менән көслөбөҙ. Бөгөн дә беҙҙең ҡаһарман яугир ирегеттәребеҙ дөйөм ватаныбыҙ - Рәсәй азатлығын яҡлап, Махсус хәрби операцияла гәзиз ғүмерҙәрен бирә, иҫ киткес батырлыҡтары менән таң ҡалдыра. Тағы ла Мәрйәм апайҙың һүҙҙәрен килтерәм: туған телдәребеҙ халыҡтарҙың булмышына, дуҫлығына, ил тотороҡлоғона булышлыҡ итә. "Әсәй" тип теле асылған балалар туған теле аша рус телен яҡшыраҡ өйрәнә. Улар бер-береһенә һис ҡамасауламай, кире-һенсә, бер-береһен байыта ғына.

Йыйып ҡына әйткәндә, туған тел яҙмышын мәғариф чиновниктары ҡулына тулайым тапшырып ҡуймайынса, үҙебеҙ ҙә "БР халыҡтары телдәре турәһында"ғы закон нигеҙендә башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән, дәүләт теле булараҡ, ғәмәлгә ашырылыуын талап итергә, туған тел яҙмышын бергәләшеп хәл итергә бурыслыбыҙ. Законды бит әле бер кем дә көсөнән сығармаған. Унан һуң, мәғариф чиновниктары Рәсәй Федерацияһы Конституцияһын, атап әйткәндә, уның туған телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү турәһындағы 3-се, 26-сы, 68-се статьяларын боҙоп ҡына ҡалмай, ә Рәсәй Президенты Владимир Путинды ла ишетмәй түгелме? Рәсәй Президенты бит Рәсәй халыҡтарының телдәрен һәм мәҙәниәтен һаҡлау, үҫтереүгә булышлыҡ итеү турәһында һәр сығышында тиерлек телгә ала. Юғарыла телгә алынған указда әйтелгәндәр ҙә ҡаршы килә түгелме Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына индерелгән баяғы үҙгәрештәргә? Әллә мәғариф чиновниктары ул указдарҙы уҡымаймы, тигән аптыраулы һорау ҙа тыуа әле...

**Юнир ВӘЛИЕВ,**
**муниципаль хеҙмәт ветераны, йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың I-II саҡырылыш депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған тәҙәүсеһе, БР мәғариф отличнигы, Салауат Юлаев ордены кавалеры.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында МХО ветерандары менән дәрестәр дауам итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, унда 21 июлдә "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһы буйынса беренсе уҡытыу модуле курстары башланды. Лекциялар башланыр алдынан Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин тыңлаусылар өсөн иртәнге зарядка үткәрҙе. Күнегеүҙәр бәһлеүәндең төп сығышы менән тамамланды. Эльбрус Ниғмәтуллин ике тоннанан ашыу ауырлыҡтағы автобусты арҡан менән урынынан күсерҙе.

✓Быйыл яңы уҡыу йылы алдынан мәғариф хеҙмәткәрҙәренең традицион август кәңәшмәһе 26 августа Бөрөлә ойошторола. Дүшәмбе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе Радий Хәбиров ошо хаҡта иғлан итте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда август кәңәшмәһе күп йылдар дауамында тәүге тапҡыр республикааның баш ҡалаһынан ситтә, атап әйткәндә, Стәрлетамаҡта үтте һәм "Төбәк мәғариф системаһының стратегик йүнәлештәре" темаһына арналды.

✓Радий Хәбиров указы менән Константин Шаһиморатов Башҡортостан Башлығының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙағы тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта республика етәксеһе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында белдерҙе. Быға тиклем Шаһиморатов республикаының Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе вазифаһын биләне. 2025 йылдың июлендә үҙ теләге менән вазифаһын ҡалдырҙы.

✓Башҡортостандың биш табибы "Йылдың иң яҡшы табибы" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәр иҫәбенә инде. Иң яҡшы онколог - Республика онкология үҙәгенең Нефтекама филиалынан Әҙип Арыҫланов; иң яҡшы участка терапевы - Өфөнөң 13-сө ҡала дауаханаһы табибы Флүзә Әхмәтйәнова; иң яҡшы участка педиатры - Ҡариҙел район дауаханаһында эшләгән Эльза Лотфуллина; Рәсәйҙең иң яҡшы теш табибы - Республика стоматология поликлиникаһынан Эльвира Ғәлимуллина; иң яҡшы акушер - Сибай ҡала дауаханаһы хеҙмәткәре Алита Борискова.

✓Вуз-ара кампус резиденты булған Өфө фән һәм технологиялар университеты 202 млн һум федераль грант алыуға өлгәште. "Нанотех" ғилми һәм технологик ҡоралмаларҙы коллектив файҙаланыу үҙәге аҡсаны яңы фәнни һәм технологик ҡоралмалар һатып алыуға, лаборатория биналарын яңыртыуға һәм ғилми хеҙмәткәрҙәргә ярҙам итеүгә йүнәлтә. Шулай уҡ юғары температурала материалдарҙы һынау буйынса лаборатория булдырыу, кристалл структураһын тикшереү өсөн заманса электрон микроскопты яңыртыу һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл итеү ҡаралған.

✓ Уҡыу предметтары "Туған тел Рәсәй Федерацияһы халҡының теле" тип аталасаҡ. Предметтың исемен шулай киңәйтеү ил Президентының Рәсәй халыҡтары телдәре реестрын төҙөргә ҡушыуы менән дә бәйле.



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БЕҘҘЕҢ ФЕКЕРҘЕ ИШЕТТЕЛӘР



**Тел мәсьәләһе - иҫ киткес нескә ғәмәл, ҡайһы берҙә уны сәйәсиләштереү өсөн бәләкәй генә бер сәбәп тә етә. Шуның өсөн килеп тыуған мәсьәләләрҙе, шулай уҡ халҡыбыҙ өсөн үтә мөһим туған тел мәсьәләһен конструктив хәл итеү мөһим. Бының өсөн мөмкинлектәр, ҡануни нигеҙ бар.**

Туған телдәрҙе өйрәнеү сәғәттәренең күләме, уҡыу предметы булараҡ, уларҙың мәктәптәге атамаһы буйынса барлыҡҡа килгән мәсьәләләр күптән тикшереүгә сығарылғайны. Федераль власть органдары бойороҡ проекттарын йәмәғәтселек ҡарамағына алдан тәҡдим итергә, рәсми фекер алышыу өсөн төбәктәргә ебәрергә бурыслы. Шуны күҙҙә тотоп, ошо уҡыу предметының исемен "Рәсәй Федерацияһы халҡының туған теле һәм (йәки) Рәсәй Федерацияһы Республикаһының дәүләт теле" тип атау урынына "Рәсәй Федерацияһы халҡының теле һәм (йәки) Рәсәй Федерацияһы Республикаһының дәүләт теле" тип үҙгәртеү хаҡындағы Рәсәй Мәғариф министрлығы бойороғо проекты билдәле булғас, РФ Дәүләт Думаһында Рәсәй халыҡтарының этномәҙәни үҫешен закондар менән тәьмин итеү һәм Дәүләт Думаһының Милләттәр эштәре буйынса комитеты ҡарамағындағы тел сәйәсәтен камиллаштырыу буйынса эшсе төркөмдөң махсус ултырышы уҙғарылды. Унда ҡатнашыусыларҙың барыһы ла, йәғни депутаттар, илдең һәм айырым төбәктәрҙең мәғариф системаһы вәкилдәре, шул иҫәптән Башҡортостандыҡылар ҙа, ғалимдар, Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ вәкилдәре уҡыу предметының "туған тел" атамаһын һаҡлап ҡалыу мөһимлеге тураһында берҙәм фекерен белдерҙе һәм эшсе төркөмдөң тәҡдимдәрен Рәсәй Мәғариф министры адресына ебәрҙе.

17 июлдә РФ Мәғариф министрлығының үҙгәртелгән бойороғон Рәсәй Юстиция министрлығы раҫланы: беҙ тәҡдимдәребеҙҙең иҫәпкә алыныуын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән билдәләйбеҙ. Был дөрөҫ йүнәлеш, һәр беребеҙ өсөн "туған тел" төшөнсәһе - төп һәм изге. Шулай итеп, 2025 йылдың 1 сентябренән уҡыу предметтары "Туған тел (Рәсәй Федерацияһы халҡының теле һәм (йәки) Рәсәй Федерацияһы Республикаһының дәүләт теле" тип аталасаҡ. Предметтың исемен шулай киңәйтеү ил Президентының Рәсәй халыҡтары телдәре реестрын төҙөргә ҡушыуы менән дә бәйле. Артабан реестрға теркәлгән (шул иҫәптән, унда башҡорт теле лә инәсәк) бөтә телдәрҙе уҡытҡанда, шул иҫәптән, дәреслектәр, уҡыу пландары төҙөгәндә тейешле методик ярҙам күрһәтеләсәк.

Рәсәй Федерацияһы Президенты тарафынан ағымдағы йылдың 11 июлендә ҡул ҡуйылған 474-се "Рәсәй Федерацияһының дәүләт тел сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлау тураһында"ғы Указында туған телдәрҙең роле һәм урыны, уларҙы һаҡлау һәм үҫтереү тураһында бик асыҡ әйтелгән. Маҡсаттар араһында "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының телдәрен, атап әйткәндә, аҙ һанлы ерле халыҡтарҙың телдәрен, милли ҡаҙаныштарын һәм Рәсәй Федерацияһының тарихи-мәҙәни мираҫы булараҡ тел төрлөлөгөн һаҡлауҙы, яҡлауҙы һәм үҫтереүҙе тәьмин итеү" билдәләнә.

Шулай итеп, туған телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ҙур һәм системалы эш башланды, беҙҙең бурыс - унда әүҙем ҡатнашыу, уны республикабыҙҙа тормошҡа ашырыуҙың аныҡ планын ҡабул итеү. Әгәр проблемаларҙы хәл итеү буйынса һорауҙар һәм теләктәр булһа, уларҙы РФ Мәғариф министрлығы адресына ебәрергә кәрәк, сөнки ҡарарҙарҙың күбеһе закон түгел, ә ведомство бойороҡтары булараҡ ҡабул ителә. Шуға күрә туған тел мәсьәләһе өсөн янып көйгән һәр граждан һәм башҡарыусылар араһында туранан-тура кире бәйләнеш булдырыу мөһим.

**Эльвира АЙЫТҠОЛОВА,**
**Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Президиумы рәйесе.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# Ә ЭШ ТОРБАЛА ИКӘН...

**Үткән аҙнала бер нисә көн рәттән Украина Ҡораллы көстәре (ВСУ) Мәскәү өлкәһен сәпкә тоторға маташып, 16 дрон, шуларҙың 13-ө Мәскәү ҡалаһына йүнәлтелгән аппараттар ебәрҙе һәм улар нигеҙҙә Зеленоград ҡалаһы өҫтөндә атып төшөрөлдө. Урындағы халыҡ социаль селтәрҙәрҙә яҙыуынса, төндә шартлау тауыштары ишетелгән, торлаҡ йорт өҫтөндә атып төшөрөлгән бер пилотһыҙ аппараттың ут ҡабынған һыныҡтары бер нисә автомобилде зыянлаған, ҡайһы бер биналарҙың тәҙрәләре ҡыйратылған. Бәхеткә, Мәскәү мэры Сергей Собянин хәбәр итеүенсә, етди емереклектәр юҡ, тыныс халыҡ зыян күрмәгән.**

• РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 20 июлгә ҡарай шул төндә беҙҙең һауа һөжүменә ҡаршы дежур саралар Рәсәй территорияһы өҫтөндә самолет рәүешендәге 93 шартлатҡыс аппаратты атып төшөргән. Һәр ваҡыттағыса, Рәсәй хәрби көстәре лә яуапһыҙ ҡалмай, ошо уҡ төн эсендә (ВСУ мәғлүмәттәре буйынса) Украина тарафына 344 дрон, "Искәндәр"ҙән 20 ракета һәм 15Х-101 ракетаһы менән һөжүм ителгән.

Әле генә Рәсәй менән сираттағы һөйләшеүҙәрҙе дауам итеүгә ҡаршы булған Владимир Зеленский Украинаның Милли хәүефһеҙлек һәм оборона советы секретары Рөстәм Үмәровтың ошо көндәрҙә ике ил араһында башланған һөйләшеүҙәрҙе дауам итергә тәҡдиме хаҡында белдерҙе. Сәйәсмәндәр был белдереүгә шикләнеп ҡарай: Украинаның был ҡарары Ҡушма Штаттар менән берәй хәйлә ҡороуға оҡшаған, ти улар, сөнки бынан алдараҡ АҠШ президентының Украина буйынса махсус илсеһе Киевта булып киткән һәм тап ошо көндәрҙә Дональд Трамп Рәсәйгә Украина менән тыныс һөйләшеп килешеүгә 50 көнлөк ультиматум белдергән. Британияның Spektator журналы яҙыуынса, был ультиматум Владимир Путинға көтөлмәгән бүләк кенә булған: ул АҠШ Конгресын Рәсәйгә яңы һәм ҡаты санкциялар иғлан итеүгә йыйыныуын туҡтатып торорға мәжбүр иткән.

Европа мәғлүмәт саралары, Трамптың ниндәйҙер санкциялары ла, ультиматумы ла Мәскәүҙең ҡарарына йоғонто яһамаясаҡ, тип яҙа. Ғөмүмән, Америка президентының "һәрмәүестәре" бөтөн тарафты ла ҡармап өлгөрә: ошо көндәрҙә генә ул үҙе көнәркәш күргән БРИКС илдәренең бөтөн тауарҙарына ла 10 процент, ә Рәсәй тауарҙары менән ауыл хужалығы ашламаларына 100 процент пошлина индерергә йыйыныуын белдерҙе. Бының менән ул БРИКС берләшмәһенең тарҡалыуына иҫәп тота, тиҙәр. Ә бына Европаның, ЕС илдәре фермерҙары ҡәтғи ҡаршы килеүгә ҡарамаҫтан, Рәсәй минераль ашламаларынан тулыһынса баш тартырға ниәтләүен Владимир Путин иҫәрлек тип атаны. Рәсәй Ашламалар етештереү ассоциацияһы башлығы Гурьев фекеренсә, был Европала ашламаға һәм артабан уңыш алыуға килтерелгән зыян һөҙөмтәһендә аҙыҡ-түлеккә хаҡтар артыуына ғына килтерәсәк.

• Көньяҡтан да һалҡын елдәр иҫә. Ҡасан ғына әле Рәсәйгә ҡарата дуҫ, татыу мөнәсәбәттә булған Әзербайжан һаман да юҡ-бар сәбәптәр менән ныҡышмалы рәүештә конфликтҡа ынтылыуын дауам итә. Күрәһең, ил башлығы Илһам Алиев ҡуйынында барыбер ниндәйҙер таш һаҡлаған: уның Төркиә йоғонтоһона бирелеп, электән дә Мәскәүгә ҡайһы бер оторолоҡ белдереүҙәре һиҙелә ине, ти күҙәтеүселәр. Беҙҙең вертолетты атып төшөрһөндәрме, тыныслыҡ көстәре яугирҙарын атһындармы - формаль рәүештә ғәфү үтенеү менән генә ҡотолоп килделәр. Күрәһең, Рәсәй тарафынан ут күршегә йомшаҡлыҡ күрһәтелгән, һәм шул арала Рәсәйҙә әзербайжан диаспораһы күкрәп сәскә ата башланы, илебеҙҙең бөтөн ҡалаларында берләшкән этник енәйәт төркөмдәре үҙҙәренең йоғонто мөхитен йәйелдерҙе.

Ләкин бына бер нисә әзербайжан мигрантының кеше үлтерeүе факты һис яуапһыҙ ҡала алмай ине: Тәфтиш Комитеты тарафынан улар ҡулға алынды һәм Бакуға был етә ҡалды. Улар асыҡтан-асыҡ ҡаршылыҡҡа табан китте. Үҙҙәрендәге Рәсәй граждандарын ҡулға алыу, туҡмау... Рәсәйгә ҡағылышлы бөтөн нәмәгә тыйыу һалыу... Тора-бара Рәсәйҙе агрессор тип атап, ә үҙҙәрен Украина яҡлы итеп күрһәтә башланылар. Бөгөнгө көн тағы бер "кампания" башланы Баку: йәнәһе, Рәсәй тарафынан бәреп төшөрөлгән тип тәкрарланыусы самолетта һәләкәткә осраған пассажирҙарҙың яҡындарына аҡса түләтеү маҡсатында, иҫбатланмаған ғәйеп тағып, Рәсәйҙе халыҡ-ара судҡа биреү өсөн материалдар әҙерләй башлағандар, имеш.

Баҡтиһәң, Алиевтың талағы ташыуы һәм бөтөн был ығы-зығыны ҡуптарыуының сере ябай ғына икән, йәғни ул Европалағы ҙур һәм аяуһыҙ газ һуғышына ҡағыла. Евросоюз, Рәсәйҙән Украина аша зәңгәр яғыулыҡ транзиты туҡтатылғас, Бакуҙан газды ике тапҡырға күберәк ебәреүҙе талап итә. Ә эш торбала булып сыҡҡан. Бакуға Рәсәйҙең газ үткәргес торбалары бик кәрәк. Бының өсөн баҫым яһауҙа, Әзербайжан дипломатиянан тыш, Рәсәйҙә оялап алған эске көс - үҙ диаспоралары һәм беҙҙә аҡса һуғыусы йоғонтоло көскә эйә олигархтары аша эш итергә теләй икән. Украина аша транзит ябылғас, Әзербайжан йылына 6 млрд доллар юғалта, шул сәбәпле Алиев ошо юғалтыуҙары өсөн Рәсәйҙән компенсация "һауырға" иҫәп тотоп, күрәләтә көрсөк юлды һайлаған, Рәсәйгә баҫым яһауҙың бер ваҡытта ла әле һөҙөмтәгә килтермәүен ошоға тиклем ул белмәнеме лә күрмәнеме икән?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Берләштерелгән двигателдәр эшләү корпорацияһы - Өфө моторҙар етештереү берекмәһенең 100 йыллығын байрам итеү сиктәрендә предприятиела алюмин ҡойоу үҙәге асылды. Яңы ҡеүәттәрҙә етештереләсәк продукция самолет һәм вертолеттарҙа файҙаланыласаҡ. "Был - үҙенсәлекле цех. Сөнки металл ҡоймайынса, ошо ысул менән етештерелгән узел һәм агрегаттарһыҙ авиация двигателдәрен эшләп булмай. Ростех дәүләт корпорацияһы инвестицияһына яңы бина төҙөлдө, заманса ҡорамалдар һатып алды", - тине, тантанала сығыш яһап, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

✓ Берләштерелгән двигателдәр эшләү корпорацияһы - Өфө моторҙар етештереү берекмәһе предприятиеның 100 йыллығы айҡанлы Александр Невский орденына лайыҡ булды. Уны Ростех дәүләт корпорацияһының генераль директоры Сергей Чемезов тапшырҙы. Наградлау тураһындағы Указға Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған. Александр Невский ордены - Рәсәйҙәге иң почетлы дәүләт наградаларының береһе. Уны төп тармаҡтар үҫешенә ҙур өлөш индергән һәм юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән өсөн тапшыралар.

✓ Башҡортостанда ауыл мәктәптәре директорҙары өсөн гранттар тураһында положение раҫланды. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, гранттар биреү мәсьәләһен республика комиссияһы ҡабул итә. Конкурста халыҡ һаны 25 меңдән артмаған ауыл биләмәһендә урынлашҡан дөйөм белем биреү ойошмалары етәкселәре ҡатнаша ала. Документтар тапшырылған көндә дәғүәсенең йәше 45-тән артмаҫҡа тейеш. Бынан тыш, етәксенең конкурс уҙғарылғанға тиклемге йылдың 1 сентябренән дә һуңға ҡалмайынса дөйөм белем биреү ойошмаһына эшкә урынлашыуы шарт булып тора.

✓ Быйыл йыл башынан алып Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан буйынса Социаль фонд бүлексәһе республика халҡына шифаханаларҙа һаулыҡтарын нығытыу өсөн 4 меңдән ашыу юллама биргән. Һауыҡтырыуҙың был сараһы инвалидтарға, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға, хәрби хәрәкәттәр ветерандарына, радиация тәьҫире аҫтында ҡалған кешеләргә һәм айырым иғтибарға мохтаж граждандарҙың башҡа категорияларына ҡағылған. Юллама менән бергә дауаланыу урынына бушлай йөрөү һәм кире ҡайтыу өсөн талондар бирелә. Инвалид граждандарҙы оҙатып йөрөүселәр өсөн дә путевка бушлай.

✓ Ағымдағы йылдың ғинуар-июнендә Башҡортостанда 898 мең квадрат метр шәхси торлаҡ төҙөлгән. Күләм 2024 йылдың беренсе яртыһы менән сағыштырғанда 21 процентҡа кәмегән. Төбәгебеҙгә Рәсәйҙәге шәхси торлаҡ төҙөлөшөнөң 2,4 проценты тура килә. Был күрһәткес буйынса 7-се урынды биләйбеҙ. Лидерҙар - Мәскәү өлкәһе (15,4 процент), Краснодар крайы (5,7), Ленинград өлкәһе (5,3), Татарстан (4,5), Свердловск өлкәһе (3,2).

*ҠЫҪҠАСА*

# УҠЫТЫУСЫ ЛАЙЫҠ БЫҒА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров указы менән дәүләт һәм муниципаль белем биреү учреждениелары педагогтарына республика шифаханаларында дауаланыуға ике аҙналыҡ сертификаттар бирелә.** Хоҡуҡ мәғлүмәте порталында баҫылған документҡа ярашлы, быйыл сертификаттың номиналы 56 мең һум тәшкил итә. Төбәктең шифаханаларында ял итеүгә хоҡуҡлы педагогия хеҙмәткәрҙәренең эш стажы өс йылдан да кәм булмаҫҡа тейеш. Бынан тыш, белем биреү тармағындағы стаждың кәмендә 10 йыл булыуы мөһим. Сертификатты алыу өсөн ғаризаны педагогтар төп эше урыны буйынса үҙҙәренең белем биреү ойошмаларына тапшыра. Сертификатты Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институты бирә. Бындай сертификаттарҙы өс йылға бер тапҡыр алырға мөмкин. Уҡытыусыларҙы шифахана-курорт дауаланыуы менән тәьмин итеү башланғысы менән Радий Хәбиров былтыр август айында мәғариф буйынса республика кәңәшмәһендә сыҡты. Был тәҡдим унда ҡатнашыусылар өсөн көтөлмәгән һәм ҡыуаныслы яңылыҡ булды.

✓ **Туристарҙың республиканың сәнәғәт объекттарына ҡыҙыҡһыныуы арта.** Әгәр 2022 йылда бындай турҙарға ни бары 8 мең кеше килгән булһа, 2024 йылда был һан 23 меңдән ашып киткән. Ҡунаҡтарҙы ҙур предприятиеларҙың уникаль технологиялары һәм етештереү мәҙәниәте менән танышыу мөмкинлеге йәлеп итә. Екатеринбургта үткән "Иннопром-2025" күргәҙмәһе майҙансығында тәҡдим ителгән сәнәғәт туризмы үҫешен баһалау системаһы мәғлүмәттәре буйынса, рейтингта ҡатнашҡан 86 төбәк араһында Башҡортостан алдынғылар иҫәбендә. 300 күрһәткескә таянып, белгестәр сәнәғәт потенциалын күрһәтеү, һөнәри йүнәлеш биреү, турҙар ойоштороу һәм эшлекле әүҙемлек йүнәлештәре буйынса тикшереү үткәргән.

✓ **Башҡортостанда тәрбиәгә бала алған ғаиләләр, опекундар һәм уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыусылар өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособие күләме билдәле булды.** Социаль фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе мәғлүмәттәренә ярашлы, 2025 йылдың 1 февраленән район коэффициенты менән бергә түләүҙәрҙең күләме 30 982,97 һум тәшкил итә. Инвалид баланы, 7 йәше тулған йәки бер туған ике йәки унан күберәк баланы тәрбиәгә алғандар өсөн пособие күләме һәр балаға 236 735,10 һум була. Шул уҡ ваҡытта уллыҡҡа алыусылар һәм опекундар Рәсәй Федерацияһы граждандары булырға, Рәсәйҙә даими йәшәргә тейеш. Бер тапҡыр бирелә торған пособиены алыу өсөн 6 ай эсендә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһенең клиенттар хеҙмәтендә, Күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталында бирергә мөмкин. Социаль фондтың төбәк бүлексәһе матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2024 йылда 780-дән ашыу ғаилә ошондай түләүҙәр алған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МАҠТАУҒА ЛАЙЫҠЛЫЛАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә легендар Шүлгәнташ мәмерйәһенең ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәрен ЮНЕСКО-ның бөтә донъя исемлегенә индереүгә өлгәшкән яҡташтарыбыҙҙы бүләкләне.**

- Был мөһим тарихи ваҡиға, ҙур яуаплылыҡ, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. - Рәсәйҙән 33 объект ошо исемлеккә инде. Ошо оло ваҡиға уңайынан барыһын да ҡотлайым!

Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин "Халыҡтар дуҫлығы" ордены менән бүләкләнде. "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры Фәүзил Маликовҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исеме бирелде. "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директорының ғилми-тикшеренеү эштәре буйынса урынбаҫары Раян Әхмәтйәнов, ғилми-тикшеренеү бүлеге мөдире Нәркәс Әминева, "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт биосфера ҡурсаулығы" ғилми хеҙмәткәре Ольга Червяцова, Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының башҡарма директоры Рената Лоҡманова Башҡортостан Башлығының Маҡтау грамоталарын алды.

- Был беҙҙең дөйөм еңеү! - тине Данир Ғәйнуллин. - Беҙ һис һүҙһеҙ танылыу алдыҡ. Әммә беҙ юлдың башында ғына, инфраструктураны тәртипкә килтерәбеҙ. Ярҙамығыҙ, иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

# ИДАРАСЫЛАР ТӘРБИӘЛӘНӘ

**Шишмә районындағы Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркы биләмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан геройҙары" программаһы финалсылары менән осрашты.**



"Башҡортостан геройҙары" республика кадрҙар проекты - ил Президенты тәҡдим иткән "Геройҙар ваҡыты" федераль программаһының аналогы. Программаның төп маҡсаты - МХО-ла ҡатнашыусыларға тыныс тормошҡа яраҡлашырға ярҙам итеү, республика ҡалалары һәм райондары иҡтисадын һәм социаль өлкәһен үҫтереүгә һәләтле белгестәр һәм идарасылар командаһын әҙерләү. "Башҡортостан геройҙары" программаһы республикала быйыл февралдә старт алды. 70 ҡатнашыусы финалға үтте.

-"Ҡатнашыусыларҙы теркәү һаны буйынса беҙ илдә беренсе урынды алдыҡ. Был МХО ветерандарының беҙҙең проектҡа ышанысы, республика үҫешенә үҙ өлөшөн индерергә әҙерлеге хаҡында һөйләй. Проект сиктәрендә һеҙ ғәмәлдәге ҡануниәт, хәҙерге шарттарҙа дәүләт һәм муниципаль идара итеү практикаһы, милли проекттар, дәүләт, шул иҫәптән республика программалары тураһында белемегеҙҙе арттырырһығыҙ. Иҡтисад тармаҡтары, социаль өлкә, территорияларҙы үҫтереү үҙенсәлектәре хаҡында белерһегеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров һәм программа финалсыларының һорауҙарына ла яуап бирҙе, уларҙың ҡайһы берҙәре менән танышты.

Мәҫәлән, Рәсәйҙең Социаль фонд бүлексәһе хеҙмәткәре Илдар Вәлиев, Махсус хәрби операцияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, "Башҡортостан геройҙары" республика кадрҙар программаһының финалсыһы булды. Ул 2022 йылдың көҙөндә өлөшләтә мобилизация барышында фронтҡа алына. 2023 йылдың декабрендә ғаилә хәле буйынса демобилизациялана һәм элекке эш урынына ҡайта. Республикала "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһының башланыуы тураһында иғлан ителгәс, Илдар Вәлиев документтарын йыйып тапшыра һәм финалға сыға. Яҡташыбыҙ үҙенең ҡарарын фронтта яңы тәжрибә туплауы менән аңлата, уны граждандар тормошонда ла ҡуллана. Атап әйткәндә, ул йәштәрҙе тәрбиәләү менән шөғөлләнергә, ирекмәндәргә ярҙам итергә һәм һөнәри эшмәкәрлегендә яңы һөҙөмтәләргә өлгәшергә ниәтләй.

# БУРЫСҠА АҠСА БИРҘЕҢМЕ?

**Башҡортостан парламенты бурысҡа аҡса биргән граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡларға тәҡдим яһаны. Рәсәй закон сығарыусылар советы Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ебәргән федераль закон проекты концепцияһын хупланы. Был хаҡта Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Закон проекты ҙур суммаға бурысҡа аҡса биреүселәрҙең мәнфәғәттәрен яҡлау механизмын тәҡдим итә. Бөгөн дә килешеүҙә яҙма рәүештә төҙөү талап ителә, ләкин тормошта был һәр саҡ үтәлмәй. "Граждандар араһында килешеүҙе нотариуста раҫларға һәм аҡса алыусыға бурысын үтәүҙе тәьмин итеү сараларын күрергә йәки биреүсе файҙаһына страховка эшләргә бурыслы итмәк өсөн тәҡдим итәбеҙ быны", - тип аңлатты парламент спикеры Константин Толкачев. Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, халыҡта аҡсаға молхтажлыҡ арта, бурыс кире ҡайтарылмау сәбәпле бәхәстәр күбәйә һәм был мәсьәләгә системалы ҡарарға кәрәк.

Граждандар араһында рәсми килешеү тураһында аныҡ статистика юҡ, әммә был өлкәлә аҡса күләменең үҫеше күҙәтелә. Юғары процент ставкалары арҡаһында банк кредитын алыу ауырлашты, шуға күрә халыҡ бурысты алыуҙың башҡа юлдарына күсә. Бурысҡа аҡса биреү - Рәсәйҙә киң таралған күренеш. "Бөтә был хәлдәрҙе иҫәпкә алып, бурысҡа аҡса биреүселәрҙең хоҡуҡтарын яҡлау һәм улар өсөн кире ҡайтарылмау хәүефен кәметеү кәрәк тип иҫәпләйбеҙ", - тине Толкачев.

Ул проект буйынса фекер алышыу булыуын да билдәләне. Эксперттар тикшеренеүҙәре артабан дауам итәсәк, проектҡа килгән тәҡдимдәр иҫәпкә алынып, ул камиллаштырыласаҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың ашығыс хеҙмәттәре халыҡҡа мөрәжәғәт итте. Һүҙ янғын һәм һыу хәүефһеҙлеге тураһында бара. Башгидрометүҙәк мәғлүмәттәре буйынса, был көндәрҙә республиканың көньяҡ-көнсығышында ғәҙәттән тыш янғын хәүефе көтөлә. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты ошо турала иҫкәртә. Бынан тыш, республика халҡының телефондарына һыуҙа үҙендә нисек тотоу кәрәклеге тураһында смс-хәбәр килде. "Һыу объекттарында иғтибарлы булығыҙ! Балаларҙы ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ! Рөхсәт ителгән урындарҙа ғына һыу инегеҙ! Тел: 112!" - тиелә хәбәрҙә.

✓"Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин йәнә ҡиммәтләнде. 6 һәм 13 июлдә лә компания яғыулыҡҡа хаҡты артырғайны. Әле АИ-95 бензинының бер литры - 59,90 һум (+10 тин), АИ-95 ATUM 60,95 һум (+10 тин) тора. Бензиндың башҡа маркаларына һәм дизель яғыулығына хаҡтар үҙгәрешһеҙ ҡала. Хәбәр ителеүенсә, 13 июлдә "Башнефть" автозаправкаларында бензиндың популяр маркалары 40 тингә ҡиммәтләнгәйне.

✓МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләренә торлаҡ менән ярҙам итәләр. Бында торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж, ҡабаттан никахҡа инмәгән һәм бер йәки бер нисә бала тәрбиәләгән ир менән ҡатын тураһында һүҙ бара. МХО-ла һәләк булғандарҙың тормош иптәштәре торлаҡ һатып алыуға йәки төҙөүгә социаль түләүҙәрҙе тәү сиратта алырға хоҡуҡлы. Хөкүмәттә ошо турала ҡарарға ҡул ҡуйылған. Социаль түләүҙәр торлаҡ хаҡының 35 процентынан кәм булмай, тиелә документта. Хәбәр ителеүенсә, аҡсаны яңы төҙөлгән йортта фатир һатып алыуға; үҙ торлағыңды төҙөүгә; ипотеканың тәүге иғәнәһенә йәки уны ҡаплауға тотонорға мөмкин.

✓Өфөнән Алина Фәрхетдинова Һиндостанда үткән Miss Glam World-2025 халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында еңеүсе булды, тип хәбәр итә киң мәғлүмәт саралары. Ул Рәсәй Федерацияһы исеменән сығыш яһай һәм абсолют еңеү яулай. Алинаға 19 йәш, Өфө фән һәм технологиялар университетында уҡый. Конкурста икенсе урынды Израиль һылыуы яулай, өсөнсө урынға Сербиянан килгән ҡыҙ сыға. Конкурс милли һәм киске кейемдәрҙә дефиле, интеллектуаль тур, визит карточкаһы кеүек этаптарҙан тора.

✓Стәрлетамаҡта йәшәгән иргә законһыҙ спиртлы эсемлек һатҡаны өсөн 2 миллион һумдан ашыу штраф һалынған. БР Прокуратураһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылда ир билдәһеҙ кешенән спиртлы продукция һатып ала. Полиция хеҙмәткәрҙәре тикшереү үткәргән саҡта уның гаражында дөйөм хаҡы 100 мең һумдан ашыу булған 200 литр самаһы контрафакт араҡы таба. Ғәйепләнеүсе үҙ ғәйебен таный. Суд уға 2,1 миллион һум күләмендә штраф һала, шулай уҡ спиртлы эсемлекте юҡ итергә ҡарар сығара.

✓ *Хәҙер Мәскәү, Ҡаҙан, Екатеринбург һәм башҡа ҡалаларға барып етеү ваҡыты ҡыҫҡара. Яңы юл М-5 трассаһындағы көсөргәнешле хәрәкәтте лә яйлай, пассажирҙар ағымының, йөк машиналарының бер өлөшөн үҙенә ала.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЮЛДАР ҘА ЗАМАНСА ХӘҘЕР

**(Башы 1-се биттә).**

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Президентҡа республикаға күрһәткән даими иғтибары, М-12 федераль трассаһы участкаһын Башҡортостан биләмәһе аша һалыуҙы хуплаған өсөн төбәк халҡы исеменән рәхмәт белдерҙе:

- Республика яҡтыртылған дүрт һыҙатлы дөйөм оҙонлоғо 205 километр булған беренсе класлы трасса алды. Ул илебеҙҙең көнсығышы менән көнбайышын тоташтырыусы тағы ла ҙурыраҡ юлдың бер өлөшө булып тора. Хәҙер Мәскәү, Ҡаҙан, Екатеринбург һәм башҡа ҡалаларға барып етеү ваҡыты ҡыҫҡара. Яңы юл М-5 трассаһындағы көсөргәнешле хәрәкәтте лә яйлай, пассажирҙар ағымының, йөк машиналарының бер өлөшөн үҙенә ала. Трасса дүрт район аша үтә һәм уларҙың иҡтисади үҫешенә ыңғай йоғонто яһаясаҡ, - тип баһаланы Радий Фәрит улы мөһим юл төҙөлөшөнөң тамаланыуын.

М-12 "Көнсығыш" федераль автомобиль трассаһының Дүртөйлө - Ачит участкаһында төҙөлөш-монтаж эштәре 2022 йылда башланғайны. Эш барышының иң ҡыҙыу осорҙарында объектҡа 5534 кеше һәм 1957 берәмек техника йәлеп ителә, бөтәһе 2 млн тоннанан ашыу асфальт-бетон япмаһы түшәлә. Барлығы 33 юл үткәргес, 9 ҡыр йәнлектәрен үткәргес, 145 һыу үткәргес торба, 12 күпер, шул иҫәптән Борай районының Вострецово ауылы эргәһендә Ағиҙел йылғаһы аша 813 метр оҙонлоҡтағы күпер һалына. Борай ауылы эргәһендә Өфө - Бөрө - Яңауыл төбәк автомобиль юлы һәм Үрге Тәтешле ауылы янында Борай - Иҫке Балтас - Көйәҙе юлы менән киҫешкән ерҙәрҙә транспорт сиселеше булдырыла.

Яңы юл автоматлаштырылған юл хәрәкәте идараһы системаһы менән йыһазландырылған - 242 видеокамера, 249 мәғлүмәт знагы һәм таблоһы, 71 транспорт детекторы һәм 7 метеостанция ҡуйылған. М-12 трассаһында, Мәскәүҙән Ҡаҙанға тиклем ҡулланылған кеүек, "Ирекле ағым" юл йөрөү өсөн контактһыҙ түләү системаһы эшләй. Шулай уҡ шлагбаумлы барьер ҙа бар. Тариф өс участкаға бүленгән: Дүртөйлө - Борай, Борай - Октябрьский (Свердловск өлкәһе), Октябрьский - Ачит.

Шулай итеп, эйе, юлдар ҙа заман талаптарынса һалына һәм араларҙы яҡынайта бара хәҙер. Был М-12 юлы буйынса йөрөргә тура килмәһә лә, унын һөҙөмтәлелеген һәр кем тояҫаҡ: ул республика кимәлендә генә түгел, ә бөтә Рәсәй кимәлендә мөһим ваҡиғаға әйләнәсәк. Араларҙы яҡынайтыу ғына түгел, РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин әйткәнсә, "сифатлы юлдар инвестициялар алып киләсәк, бизнес үҫешенә булышлыҡ итәсәк, яңы эш урындары булдырасаҡ".

*АҢЛАТАБЫҘ!*

# ШТРАФТЫ КҮБЕРӘК ТҮЛӘҺӘҢ...

## ҡағиҙәләр һанға һуғылыр, моғайын



**Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанда йәшәүселәрҙең дә тормошона ҡағылған бер нисә яңы законға ҡул ҡуйҙы. Документтар рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты. "Башинформ" уларҙы өйрәнеп, иң мөһим яңылыҡтарҙы йыйып тәҡдим итә.**

● Хәрби хеҙмәттән ҡасҡандар өсөн штраф арттырыла. Владимир Путин хәрби комиссариатҡа йәшәгән урындан күсеү тураһында мәғлүмәт бирмәгәндәргә штрафты арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Был штраф элек 1-5 мең һум булған, хәҙер 10-20 мең һумға тиклем арттырылды. Документта: "Теркәлмәгән осраҡта ла, яңы урынға күсеү тураһында мәғлүмәт бирмәү йәки күрһәтелгән ваҡыт эсендә хәрби комиссариатҡа бармау 10-20 мең һум административ штрафҡа килтерә", - тип яҙылған. Яңы закон 7 июлдән ғәмәлгә инде.

● Ветерандар тураһында закон. Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары, шулай уҡ Херсон һәм Запорожье өлкәләрендә Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарға һуғыш ветераны статусы бирелә. Был законға Владимир Путин ҡул ҡуйҙы. Яңы закон буйынса, 2022 йылдың 24 февраленән - Донецк һәм Луганскта, 30 сентябрҙән Херсон һәм Запорожьела хеҙмәт иткән хәрбиҙәр, шулай уҡ был төбәктәрҙә минаһыҙландырыу менән шөғөлләнгән Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре ветерандәр исемлегенә инә. Төп шарт - хеҙмәт итеү ваҡытының 6 айҙан кәм булмауы йәки ғәфү итерлек сәбәптәр буйынса был урындан күсерелеү. Закон минаһыҙландырыуҙа ғүмерен хәүефкә ҡуйған хеҙмәткәрҙәрҙең эшен айырым билдәләй.

● Транспортты туҡтатыу буйынса штрафтар арттырыла. Владимир Путин юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтарҙы арттырыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Полиция хеҙмәткәренең туҡтатыу тураһындағы талабын үтәмәгән өсөн штраф 7-10 мең һумға тиклем күтәрелде. Был элекке 500-800 һумдан күпкә күберәк. Шулай уҡ ауыр йөк машиналарын үлсәү һәм габарит контролен уҙғармаған өсөн 600 мең һум штраф ҡаралған. Йөк машиналары өсөн махсус рөхсәтте дөрөҫ бирмәгәндәргә штрафтар: граждандарға - 3-5 мең, вазифалы кешеләргә - 20-30 мең, юридик шәхестәргә - 50-150 мең һум.

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ӘХМӘТҒӘЛИН ХӘКИМЙӘН РӘХИМЙӘН УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған башҡорт яугиры, Советтар Союзы Геройы. 1923 йылдың 15 июнендә (икенсе мәғлүмәттәр буйынса, 1924 йылдың 10 майында) Башҡортостан АССР-ы Тамъян-Ҡатай кантоны (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Учалы районы) Сәфәр ауылында тыуған. Милләте башҡорт. Тулы булмаған урта белемле. Мәктәпте тамамлағас, "Октябрь" колхозында тракторсы булып эшләй.

1942 йылдан - Ҡыҙыл Армияла. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Курск дуғаһында, Смоленщинала, Прибалтикала алыштарҙа ҡатнашҡан.

Өлкән сержант Хәкимйән Әхмәтғәлин взвод командиры ярҙамсыһы, һуңынан взвод командиры була. Уның яуҙаштары дошман менән батырҙарса алыша, күп тапҡыр боевой орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Улар, командование бойороғон үтәп, бер нисә тапҡыр дошман тылына үтеп инә һәм рация аша совет артиллерияһы утын координациялай. Шундай бер алыш барышында взвод Псков өлкәһендә оборона өсөн уңайлы булған бейеклекте (убаны) биләй һәм 50 кешенән ашыу һалдаты булған немец подразделениеһының бер нисә контрһөжүмен кире ҡаға. Беҙҙең яугирҙар немецтарҙың күбеһен юҡ итә һәм 18 дошман һалдатын әсирлеккә ала. 15 июлдә взвод тағы бер мөһим бейеклекте биләй һәм дошмандың бер нисә контрһөжүмен кире ҡаға.

1944 йылдың 17 июлендә беҙҙең яугирҙарға Латвияның Рунданы ҡасабаһын алыу заданиеһы бирелә. Өлкән сержант Әхмәтғәлинға, взводы менән фронт һыҙығы аша үтеп, Сунуплява бейеклегендә нығыныу һәм совет артиллерияһының утын немец ғәскәрҙәренә, техникаһына һәм сигенеүсе дошманға йүнәлтеү бурысын йөкмәтелә. Хәкимйән Әхмәтғәлин командалығындағы разведчиктар отделениеһы Сунуплява (144,0) бейеклегенә күтәрелә, рация аша немецтарҙың дислокация урындарын штабҡа хәбәр итә. Совет артиллерияһының теүәл аныҡланған урындарҙы утҡа тотоуы һөҙөмтәһендә немецтарҙың байтаҡ техникаһы һәм һалдаттары юҡ ителә. Отрядҡа төп көстәр килгәнсе бейеклекте ҡулда тоторға бойорола. Немец һалдаттары, тере сылбыр булып теҙелешеп, автоматтарынан ут яуҙырып килә, әммә уларҙы пулемёт уты туҡтата. Тигеҙ булмаған алыштың беренсе көнө аҙағында Хәкимйән Әхмәтғәлин мина ярсығынан үлемесле яралана. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 24 мартындағы Указына ярашлы, өлкән сержант Әхмәтғәлин Хәкимйән Рәхимйән улына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә (үлгәндән һуң). Ошо уҡ юғары наградаға уның взводының 10 яугиры лайыҡ була.

Х. Әхмәтғәлин Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин, Ҡыҙыл Йондоҙ, II дәрәжә Дан ордендары, ике "Батырлыҡ өсөн" һәм "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән наградланған. Учалы ҡалаһы, Сәфәр һәм Учалы ауылдарының урамдарына уның исеме бирелгән. Сәфәр ауылында уға бюст һәм мәктәп бинаһына мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Латвияның Лудза ҡалаһы паркындағы мемориалда Хәкимйән Әхмәтғәлин һәм уның туғыҙ яуҙашы ерләнгән ҡәбер өҫтөнә ҡурған өйөлгән һәм 1963 йылда "Хәсрәтле әсә" һәйкәле асылған. Шулай уҡ Рунданы ҡасабаһында ошо геройҙар иҫтәлегенә мемориаль ансамбль ҡуйылған.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә дирижер Рөстәм Сөләймәновты һуңғы юлға оҙаттылар. Элекке йылдарҙа Рөстәм Сөләймәнов Санкт-Петербург дәүләт филармонияһының Академия симфоник оркестры артисы, Башҡорт опера һәм балет театрының симфоник оркестры етәксеһе, Башҡортостан Милли симфоник оркестрының художество етәксеһе һәм баш дирижеры булды. Ул 19 июлдә Ҡырымда ваҡытһыҙ арабыҙҙан китте. Музыканттың үлеменә йөрәк ауырыуы сәбәпсе булған. Музыкантты әсәһенең тыуған яғы Баймаҡ районында ерләйҙәр.

✓"Фатирҙар донъяһы" платформаһы мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә ике һәм өс бүлмәле фатирҙарҙы ҡуртымға алыу хаҡының артыуы теркәлгән. Әммә бер бүлмәле фатирҙар буйынса иң юғары ставкалар түбәнәйә. 2025 йылдың ғинуарында Өфөлә бер бүлмәле фатир уртаса 24,4 меңгә, апрелдә - 23,5 меңгә, май айында 23 мең һумға ҡуртымға бирелгән. Ике бүлмәле фатирҙың ҡуртым хаҡы бик артмаған: апрелдә 31 мең һум булһа, майҙа иһә 31,13 мең һум. Өс бүлмәлеләр апрелдә - 39,6 мең, майҙа 40,1 мең һум тәшкил иткән.

✓Башҡортостан көрәшселәре Ҡаҙанда көрәш буйынса Рәсәй чемпионатында һигеҙ миҙал яуланы. Турнир Рәсәйҙең 43 төбәгенән 200-ҙән ашыу ҡатнашыусыны берләштерҙе. Айнур Сираев 130 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында көмөш миҙалға лайыҡ булды. Бронза призерҙар - Рубин Раджабов (60 килограмм), Рөстәм Кәшәфетдинов (65 килограмм), Евгений Зиязов (75 килограмм), Артур Зөлҡәрнәев (80 килограмм), Денис Ускомбаев (85 килограмм), Турал Азимов (130 килограмм) һәм Мансур Юлтимиров (130+ килограмм). Ил чемпионаты призерҙары 5-7 июлдә Мәскәүҙә Донъя кубогында ҡатнашыу өсөн юллама алды.

✓Башҡортостан спортсылары Чебоксарҙа еңел атлетика буйынса Волга буйы федераль округы чемпионатында һәм беренселегендә егерме туғыҙ миҙал алды. Турнирҙа 14 төбәктән 1000-дән ашыу спортсы ҡатнашты. Улар биш йәш категорияһында ярышты. Башҡортостандың спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, республика командаһы туғыҙ алтын, 14 көмөш, алты бронза наградаларға лайыҡ булды. 1-3 августа команда Краснодарҙа Йәштәр спартакиадаһы финалында ҡатнаша.

✓Ҡаяға үрмәләүсе Өфө егете Данил Хәмиҙуллин "тиҙлеккә үрмәләү" дисциплинаһында Рәсәй беренселегендә еңеү яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ҡаяға үрмәләү буйынса миҙгелдең йәштәр старты Мәскәүҙә үтте, унда Рәсәйҙең 52 төбәгенән һәм Беларусь Республикаһынан меңгә яҡын спортсы ҡатнашты. Данил ярыштың хәл иткес этабында илдең йәш рекордсыһы Кирилл Колдоминды (Свердловск өлкәһе) уҙып китте һәм яҡшы һөҙөмтә күрһәтте - 7,002 секунд. Был уға Рәсәй спорт мастеры нормативын үтәү мөмкинлеген бирә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Донъяла барған бер ваҡиға ла, хатта күбәләктең ҡанат елпеүе лә эҙһеҙ үтмәй. Ҡайҙалыр һуғыш сыҡһа, һыу баҫһа, нефть вышкалары шартлаһа, был ҡаза шунда уҡ бар донъяға уртаҡ булған аҡса берәмектәрендә сағылыш таба*



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Тәғәмгә табу

Бында беҙ боронғо тәрбиә сараларынан тыйыу, һәр теләккә ирек бирмәү, тотанаҡһыҙ ҡылыҡҡа юл ҡуймау йолаһын күрәбеҙ. Ваҡыты, мәле етмәйенсә атай-инәй тарафынан йәш үҫмерҙәргә көҫәгән нәмә рөхсәт ителмәгән. Тыйыуға ҡарамай, Шүлгән "ҡабырсаҡтан аҙ-аҙлап ҡанды һемереп эскән", ата һүҙен тотмаған - оролған да бәрелгән, тигәндәй, кешеләрҙе ишһенмәҫ, яҡшылыҡты тиңһенмәҫ ыулы йөрәкле затҡа әйләнгән, ата йөҙөн ят, инә һөтөн ыу иткән, үҙе лә игелек күрмәгән, ҡәрҙәштәренә лә күрһәтмәгән.

Фәһем шунда, нимә ярамай, күңел шуны көҫәһә лә, тыйылған емеш тәмле тойолһа ла, инә хәтере, ата хаҡы өсөн үҙендә лә, нәҫел-нәсәбендә лә хур ҡылмаҫ, бәхетһеҙ итмәҫ өсөн тыйылғанға ыҡламау зарур. Ғөмүмән, һәр кемгә үҙен тота белеү, тыйнаҡ булыу хәйерле вә сауаплы.

"Урал батыр" эпосында һунарға, тәғәм эйеүгә бәйле башҡорт халҡы өсөн мәңгелек тыйыу тасуирлана:

Урал тоҡомо ҡоштар, тип, Бер тугандай күрешеп, Ау аулауҙан тыйышып, Аҡҡош тотоп еймәҫкә, Тип һәр кемгә әйтешеп, Аҡҡош үрсеп киткән, ти.

Аҡҡош ите кешегә Шуга харам икән, ти.

Уйым-уйым күлдәрҙәге дейеүҙәрҙең ҡоһоро теймәһен өсөн барыһы менән хушлашып, Урал халҡына, улдарына шуны әйтә:

Күлдең һыуын эсмәгеҙ, Эсеп әрәм булмағыҙ, Хараплыҡҡа төшмәгеҙ.

Башҡорттарҙың ғәҙәти аш-һыуы: бишбармаҡ, ҡуллама, ҡаҙылыҡ, өйрә, ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, әжекәй, талҡан, ҡымыҙ, буҙа, айран, бал балы, бал, балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, йыуа, еләк-емеш... Ғәмәлдә башҡорт аштары бер-береһенә ярашлы, сәләмәтлек өсөн шифалы булған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер беҙ һаулыҡты уйламай, үҙ-ара ҡушыла, берләшә алмаған ризыҡ менән туҡланабыҙ.

Бер ашағанда ит, йомортҡа, сыр, сәтләүек кеүек аҡһымлы аҙыҡтарҙы икмәк, бәрәңге һәм татлы емештәр менән тәғәм итергә ярамай. Икмәкте, бәрәңгене, борсаҡты, бананды һәм башҡа углеводлы аҙыҡты - лимон, әфлисун, ананас, помидор, клюква, сейә кеүек емештәр менән. Һөттө, ҡаймаҡты, һыйыр, үҫемлек майҙарын - ит, йомортҡа, сыр, сәтләүек менән. Бер туҡланғанда һөттө, йомортҡаны, сырҙы, балыҡты, икенсе мәртәбә икмәкте, бутҡаны, туҡмасты тәғәм итергә мөмкин. Ҡайнар аш, сәй йәиһә һалҡын һурпа, эсемлек ҡулланыу, ашағанда һыу эсеү ҡушылмай. Башҡорт бисәләре сәй әсәләр - ут әсәләр, тигән әйтем ярамағанға ишаралыр, моғайын. Сәләмәт булайым тиһәң, дөрөҫ туҡланыу хәйерле. Был хаҡта хәҙер мәғлүмәт, белешмә етерлек.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ИШАРАЛАП...

**Күберәген сәйәсмәндәр үҙенең лөғәтендә ҡулланған "Күбәләк эффекты" төшөнсәһенең асылы нимәлә тип уйлайһығыҙ? Баҡтиһәң, әле генә, кисә, былтыр йә йөҙ йыл элек кемдеңдер һаҡһыҙлығы арҡаһында йә башҡа сәбәптән бер күбәләктең ваҡытынан алда иртә таңдан ҡанаттарын елпеүе йәки елпемәүе, йәки булмаһа, кемдеңдер осраҡлы рәүештә йәки һаҡһыҙлыктан күбәләктең йәнен ҡыйыуы барлыҡ кешелек тарихын үҙгәртеүе бар икән. Йәғни грамдың күпмелер өлөшөн генә тәшкил итеүсе күбәләктең күбәләге донъяны үҙгәртә ала. Үҙгәртеү генә түгел, хатта кешелекте, донъяны һәләкәткә лә алып килеүе ихтимал бәләкәй генә йән эйәһенең. Нисек итепме? Хәҙер аңлатып ҡарайыҡ.**

# ҺЕҘҘӘ УТЫН КИҪЕЛҺӘ...

## беҙҙә юнышҡы төшә




Йәйҙең иң оҙон көндәренең таңын ҡаршылағанығыҙ бармы? Быйыл, мәҫәлән, йәйҙең иң оҙон көндәренең береһе 22 июндә көн оҙонлоғо 17 сәғәт 13 минутты тәшкил итеп, ҡояш 04 сәғәт 41 минутта ҡалҡып, 21 сәғәт 54 минутта әүен баҙарына китте. Ҡояш календарь буйынса тәғәйен ваҡытта ҡалҡһа ла, таң унан күпкә иртәрәк беленә, ер өҫтө яҡтыра башлай. Был миҙгелде халыҡта "таң һарыһы" тип атайҙар.

Шулай итеп, шартлы рәүештә алынған 22 июндең таң һарыһында ниндәйҙер дәүләттең, ҡайһылыр икенсе дәүләт менән сигенә яҡын урман аҡланында таңғы ысыҡҡа мансылған япраҡ аҫтарында күбәләктәр ойой, йәғни, ат лөғәтендә әйтһәк, юшай икән, ти. Был саҡта әле ҡоштар ҙа йоҡоһонан уянмаған, һанда-һаяҡ ҡына өкө һупылдауы, таңғы урман әтәсе ҡурпысыҡ ҡурпылдауы ғына ишетелеп ҡала. Әммә был тауыштар таң һарыһының айырылғыһыҙ элементтары, йәғни йән эйәләренең таңғы ойоуына һис тә ҡамасауламай.

Ошондай илаһи мәлдә, Ҡояш апайҙың сыҡҡанын һәм йылмайғанын көтөп тә тормаҫтан, күбәләктәр араһындағы бер тыңлауһыҙ һәм шаталағының ҡанаттарын бер-икене елпеп ебәреүе була, уның сигналы "Домино принцибы" буйынса аҡландағы барлыҡ күбәләк халҡына тарала һәм тағы ла 40-50 минут самаһы йоҡларға тейеш булған күбәләктәр аҡлан тултырып осорға тотона. Күбәләктәр үҙ нәүбәтендә аҡландың барлыҡ бөжәктәр донъяһын йоҡонан мәлһеҙ уята. "Домино принцибы" күҙ асып йомған арала барлыҡ урманға тарала һәм ҡоштар донъяһын да хәрәкәткә килтерә. Бөжәктәр менән туҡланыусы ваҡ ҡоштар - бөжәктәргә, ваҡ ҡоштарға аусы ҡоштар ябырыла. Аусы йыртҡыс ҡоштарҙың әүҙемлеге ерҙәге ваҡ йәнлектәрҙе, ваҡ йәнлектәрҙең хәрәкәте йыртҡыс хайуандарҙы ҡуҙғыта. Йыртҡыс хайуандар хәрәкәте үҙ нәүбәтендә таңдан урманға сыҡҡан йә таң ашырып урман таңын аңдыусы һунарсыларҙың ҡомарын уята. Уларҙың мылтыҡтарынан бирелгән залп үҙ нәүбәтендә яҡындағы дәүләт сигенең уяуҙан да уяу һаҡсыларын һиҫкәндерә. Ярай әле, һиҫкәндереп кенә ҡалһа, әгәр ҙә автоматик режимға ҡуйылып, таңғы 6-ла һүндерелергә тейешле булған ракета ҡоролмалары телгә килмәһә...

Ҡыҫҡаһы, "Күбәләк эффекты"н, үҙем аңлағанса, иң ябай һәм тупаҫ формала, шартлы рәүештә аңлатып бирергә тырыштым да инде. Беҙҙең күҙгә күренмәгән, космоэнергеттар теле менән әйткәндә, нескә пландағы хаотик донъяның ошондай "Күбәләк эффекты", "Домино принцибы" күренештәрен атай-олатайҙарыбыҙ элек-электән аңлаған, күҙәткән һәм ошо рәүешле барлыҡҡа килгән дә инде "Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнышҡы төшә" әйтеме.

Мин йәйҙең иң оҙон көндәренең береһе булған 22 июнде шартлы рәүештә генә килтерһәм дә, был да юҡҡа ғына түгелдер. Нимә генә булмаһын, Гитлер тап ошо көндөң таңында беҙҙең илгә ҡаршы һуғыш башлаған. Кем белә, бәлки уның иҫәбенсә, "Көтөлмәгәнлек факторы" менән "Күбәләк эффекты" араһында ла бер бәйләнеш барҙыр. Сөнки иң оҙон көндөң төнө лә иң ҡыҫҡаһы була. "Көтөлмәгәнлек факторы" философияның көтөлмәгәнлек категорияһы - "Күбәләк эффекты"ның бойомға ашыу формаһы ғиналыр, ә был эффекттың йөкмәткеһе "сәбәп-эҙемтә"-"эҙемтә-сәбәп" сылбырынан торған комплексты тәшкил итә. Был үҙ нәүбәтендә халыҡ ижадындағы ҡыҙыҡлы бер һамаҡты хәтерләтә:

*Әп-ши, сумаҙан,*
*Әбей битен йыумаған.*
*Әбей битен йыуыр ине,*
*Ҡомғанда һыу булмаған.*
*Ҡомғанда һыу булыр ине,*
*Ҡыҙы һыуға бармаған.*
*Ҡыҙы һыуға барыр ине,*
*Көйәнтәһе булмаған.*
*Көйәнтәһе булыр ине,*
*Атаһы яһамаған.*
*Атаһы ла яһар ине,*
*Лесник ағас бирмәгән.*
*Лесник ағас бирер ине,*
*Аҡсалары булмаған.*
*Аҡсалары булыр ине,*
*Сауҙалары уңмаған.*
*Сауҙалары уңыр ине,*
*Һатыр нәмә булмаған.*
*Шуға күрә был әбей*
*Бөгөн битен йыумаған.*

Донъяла барған бер ваҡиға ла, хатта күбәләктең ҡанат елпеүе лә эҙһеҙ үтмәй. Хатта бер кешенең хилафлығы өсөн дә бар кешелек яуап бирә. Ҡайҙалыр һуғыш сыҡһа, һыу баҫһа, нефть вышкалары шартлаһа, был ҡаза шунда уҡ бар донъяға уртаҡ булған аҡса берәмектәрендә сағылыш таба һәм бының өсөн бар кешелек тинләп булһа ла үҙ өлөшөн индерә, түләй башлай. Тимәк, донъяла барған барлыҡ ваҡиғалар өсөн барыбыҙ ҙа берҙәй үк яуаплы.

Әйтеүҙәренсә, биржаларҙа, банктарҙа долларҙың йә евроның ниҫәләр тингә йә һумға ҡапыл артыуы йә кәмеүе арҡаһында аҡса эшләп ҡалырға тырышыусылар донъяның ҡайһылыр урынында ер тетрәүен, һуғыш сығыуын теләй икән. Бертольт Брехттың Мамаша Куражы һуғыш теләгән кеүек. Билдәле булыуынса, Кураж 1624-1636 йылдарҙа Европала барған һуғышта үҙенең арбаһы менән кәсеп итеп йөрөй, Пушкиндың табут яһаусыһы һымаҡ. Кураж һуғыштарҙың тынып торған сағын яратмай, ҡайғыра, сөнки ул саҡта кеше үлмәһә, уға табыш килмәй башлай. Кешеләрҙең бәхетһеҙлегендә үҙенә байлыҡ туплаусыларҙың барыһын да Мамаша Кураж тип атарға була.

"Һеҙҙә утын киҫелһә, беҙҙә юнышҡы төшә" әйтеме, шулай итеп, бар донъяны, кешелекте киләсәк өсөн берҙәй үк яуаплылыҡҡа саҡырыусы иҫкәртеү ҙә һымаҡ яңғырай. Ә инде милләтте һаҡларға өндәүсе асылын Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов үҙенең ошо шиғыр юлдарында бик асыҡ итеп әйтеп биргән:

*Ил бәхете менән бәхетле бул,*
*Ил ҡайғыһы менән ҡайғылы.*
*Иң ҙур бәхетһеҙлек булыр ине*
*Шул ҡайғынан һиңә айырылыу...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ *Атаһы Хәбибулла улдары Зәйнуллаға һәм Фәтҡуллаға нисек тә булһа белем биреүҙе бурыс итеп ҡуя. Был бурыс, әлбиттә, билдәле Аҙнасура ишанға яҡын ҡан ҡәрҙәш инәһенең дә ҙур теләге һәм фатихаһы булыуға ишара.*

*АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ*

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында бер кәлимә

***Редакциянан:** Зыялылар араһында заманында киң билдәлелек яулаған руханиҙарҙың иң арҙаҡлыларынан булып, Ислам тәғлимәте даирәһенең башҡорт ерлегендәге Нәҡшбәндиә суфыйҙары тәриҡәте тип исемләнгән йүнәлеш остазы, философ, мәғрифәтсе, күренекле дин һәм йәмәғәт эшмәкәре Зәйнулла Хәбибулла улы РӘСҮЛЕВ тураһында күп яҙҙыҡ. Иң тәүҙә уҡыусыларыбыҙ был шәхес менән фиҙаҡәр журналист Рәүеф Насыров яҙмалары аша танышты. Артабан Ислам белгесе, философия фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Философия институтының Ислам донъяһы философияһы секторының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Илшат Рәшит улы Насыров тәржемәһендә дини философ, тарихсы шәйех Морат Рәмзиҙең (1855-1934), АҠШ-ның Калифорния университеты профессоры Хәмит Алғарҙың яҙмаларын да баҫтырҙыҡ. 2013 йылда иһә был хәтирәләрҙе шулай уҡ фиҙаҡәр яҙыусы Спартак Ильясов тулыландырҙы. Ҡабатлағандан доға яңыра ғына, тип, етмәһә, әле булһын Зәйнулла Рәсүлевты белмәгән кешеләр барлығын иҫтә тотоп, ошо яҙмаларҙы ҡабатлап бирергә булдыҡ.*

**Рух кеше күңелендә болот кеүек. Йә сатрашландырып йәшнәп ямғыр яуҙыра, йә үҙ эйәһе күңелендә тыныс ҡына йөҙөп йөрөй. Тышҡа бәреп сығырҙай юл тапһа, һис шикһеҙ, йәмғиәткә хеҙмәт итерҙәй маҡсат тыуҙыра. Маҡсаты хужаһын алға әйҙәй. Тау аҡтарта, даръя кистерә. Зиһенлеләрҙән йәмғиәтте етәкләрлек тәғлимәт тыуҙыра. Быуаттар үтеп, ул зиһенлененең фекер ептәре тарҡалып бөткән кеүек булһа ла, беҙ көндәлек тормошта уның менән ҡулланыуҙы дауам итәбеҙ икәнлеге асыҡлана. Тик хәҙерге заман кешеһенә ул алымдарҙың мәғәнәһе барып етмәй. Үҙебеҙҙе динле йәки динһеҙ итеп тойһаҡ та, һәр кемдең күңелендә үҙе инанған эске Аллаһы барлығын да беләбеҙ.**



Нисек кенә булмаһын, бөгөнгө дин әһеле боронғо фекерле кеше булырға тейеш түгел. Ул бөгөнгө мөхиттә, бөгөнгө йәмғиәттә, бөгөнгө сәйәсәт эсендә йәшәй икән, дини белемен ҡулланып, йәмғиәтсә фекерләргә бурыслы. Һәр төбәк, һәр быуын тарихыбыҙға инеп ҡалған ана шундай үҙ заманынса фекерләгән, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып йәшәгән дин әһелдәрен беләбеҙ. Бына шундай фани донъялыҡта халыҡтың уйкисерештәрен үҙ йөрәге аша үткәреп йәшәгән бөйөк дин әһеле, фекер һәм ғилем эйәһе, мәғрифәтсе ерҙәшем Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев. Ул бына тағы өҫтән шифалы ямғырын ҡойоп үткән болот шикелле, баҡыйлыҡтан беҙгә ер сикләп йөрөп кире ҡайтты.

Бынан теүәл биш йыл элек беҙ *(2008 йыл күҙҙә тотола.- Ред.)*, Башҡортостан йәмәғәтселеге, халыҡтың рухи шаһы Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыллыҡты билдәләгәйнек. Халҡыбыҙҙың рухи шаһының тормош юлы төрлө авторҙар тарафынан ярайһы уҡ киң яҡтыртылһа ла, уның тормош юлы, ҡайһы бер остаздары һәм тормош ваҡиғалары тураһында әле яҙылмағандар ҙа етерлек. Зәйнулла ишандың ерҙәше булараҡ, уның тормошонοң ҡайһы бер ағышына өҫтәмә мәғлүмәттәр бирмәксемен.

Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев 1833 йылдың 25 мартында Ырымбур губернаһы Өстамаҡ өйәҙе Туңғатар олоҫононоң хәҙерге Учалы районының Шәрип (Әүәз) ауылында донъяға килә. Нәҫел-нәсәптәре буйынса - ҡыуаҡандар. Улар борон-борондан уҡ Табын ҡағанаты эсендәге Барын Табын, Ҡара Табын, Күбәләк, Тиләү, Кесе Йомран, Кәлсер, Дыуан, Әйле ырыуҙары менән туғандаштар. Ҡыуаҡандар бөгөн дә Барын Табындар менән бергә йәшәйҙәр. Был күренешкә көнсығыш, йәки Урал алды табындарының даулы тарихы шаһит.

Ә ул ваҡиғалар тураһында хәтирәләр халыҡта бик күп ине. Бигерәк тә Көсөк батыр ҡатнашлығындағы "Күл һуғышы"нда еңеүҙәре өсөн йә ғорурланып, йә ҡыҙыулыҡтары сәбәпле тәбиғәт ҡапҡанына эләгеп, күптәренең көтмәгәндә һәләк булыуҙары өсөн үкенеп, хатта әсенеп һөйләй торғайнылар элегерәк.

Борон яҙмалар күп булған. Улар мәсеттәрҙә һаҡланған. Әммә мәсеттәр ағастан эшләнгәнгә күрә, улар колонизаторҙар тарафынан махсус рәүештә сүпләп яндырылғас, яҙмалар юҡҡа сыҡҡан. Үкенес, ваҡыт менән бергә тарихтың алтын бөртөктәре ҡара ергә күмелеп бөткән.

Йүрүҙән, Әй һыуы буйҙарынан ҡыҫырыҡлап сығарылған ҡыуаҡандар ҡәрҙәш барын-табындарҙан ҡуртымға ер алып, төп Урал армытынан аша уның алдына, көнсығыш битләүҙәренә урынлаша. Дәүләт ғәскәрҙәре менән ҡанлы бәрелештәр һөҙөмтәһендә, әйләләр кеүек үк, ҡыуаҡандар ҙа үҙ ерҙәрен ҡалдырырға мәжбүр була. Шунан Урал армыты аша төшөп, Уй һыуының һул ҡушылдығы Аҡ йылға буйына, төп Уралдың Әңкә һырты менән Һары түр армыты араһына барып урынлашалар. Ләкин 1730-1740 йылдарҙа Золотоустье баҫҡынсылары ул ерҙе лә хәритәгә алып, ҡыуаҡандарҙы ғәскәр менән бынан да ҡыуғас, түбәнерәк төшөп, барындарға ауаз һалалар. Барындар уларға Уй һыуының һул ярынан, Шәрип ауылы ҡаршыһынан ҡуртымға ер бирә. Ауылдың халыҡ ҡушҡан Ауаз, һуңғараҡ йомшартылып әйтелгән Әүәз исеме губерна тарафынан тәстиҡ ителмәй. Шуға ла ул ауыл элек халыҡ телендә Әүәз булып йөрөһә лә, ҡағыҙҙарҙа Шәрип тип яҙыла.

Әммә Зәйнулла тыуғанда ҡыуаҡандар инде Әүәз ауылын төплө нигеҙләп, шунда ултыраҡ тормош менән йәшәгән. Уларҙың йәйләүгә сығып ултырырлыҡ ерҙәре булмаған. Шуға ла улар барындарҙан тәүге килеп ултырған Аҡ йылғаның үренән йәйләү ере һорай. Үҙ-ара ғауғалар ҙа булып ала. Һәм улар оҙаҡ ҡына ваҡыт Аҡ йылғаның башын, Ҡара таш аҫтын йәйләү итеп тотоуға өлгәшә.

Зәйнулла, ҡустыһы Фәтҡулла менән бик күп башҡорт батырҙарының көрәшен, ғауға-һуғыштарҙы, бәхәстәрҙе тыңлап үҫә. Уның кескәй генә хисле күңеле һәр ваҡыт солохлоҡто, тигеҙлекте, ғәҙеллекте, сафлыҡты талап итә. Ул ун бер йәшенә тиклем башланғыс белемде ғаиләһендә һәм күрше Ҡужай ауылында Ҡорамшаларҙың мәҙрәсәһендә ала. Атаһы Хәбибулла, ҡарт аталары Рәсүл, йот йылында малдарын, ә унан алда батша ғәскәрҙәре тарафынан бөтә матди байлыҡтарын талатҡас, фәҡир йәшәй. Өҫтәүенә, арпа йәки тары, һоло сәсерлек тә һөрөнтө ере, тейешле эш ҡорамалдары булмай. Арбаларын, еген аттарын, һуҡа-төрәндәрен, ҡамыт әпсен-төпсөнөн карателдәр алып китә.

Түпһәлдән көнсығышҡа ҡарап ултырған ҡарындыҡ тәҙрәле йортта ғаилә ағзалары араһында ғәҙеллек һәм дөрөҫлөк хөкөм һөрһә лә, таштан һалынған мейестәренән икмәк еҫе һирәк аңҡый. Ауылда һәр береһе йә балыҡсы, йә һунарсы булғанлыҡтан, Урал армыттары уларҙы иттән өҙмәй. Әммә атаһы Хәбибулла улдары Зәйнуллаға һәм Фәтҡуллаға нисек тә булһа белем биреүҙе бурыс итеп ҡуя. Был бурыс, әлбиттә, билдәле Аҙнасура ишанға яҡын ҡан ҡәрҙәш инәһенең дә ҙур теләге һәм фатихаһы булыуға ишара. Зәйнулла ишандың тамыр-нәсбәттәре төбәктең һәр тарафта күренекле булған кешеләренә бәйле. Мәҫәлән, ололар һәм зиһенлеләр хәтерендә быуындан-быуынға бирелә килгән сәйер холоҡло кеше, халыҡ араһында "Уау диуана" тип йөрөтөлгән күрәҙәсе һәм халыҡ табибы Вәхит тураһында ла иҫкә алмау яҙыҡ булыр. Беренсенән, Вәхит диуана кешенең алдағы яҙмышын әйтеп биреүсе булған. Ауырыуҙарҙы, яралыларҙы ҡайын дегете, ылыҫлы ағас сайыры, әрекмән тамыры, алтын тамыр, уның оҡшаштары, андыҙ һ.б. үләндәр һәм есемдәр менән дауалаған.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡуяндарға һәм төлкөләргә башҡорттар махсус тоҡомло эттәр - таҙы - менән һунар иткән. Улар нәҙек оҙон аяҡлы, оҙон осло моронло, еңел кәүҙәле булған; бындай эттәр муйыны ҡуйы йөнлө бурҙайға оҡшаш. Күрәһең, башҡорттарҙа башҡа тоҡомло һунар эттәре лә булған. П. С. Паллас һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар һыуһарға ла, хатта айыуға ла эттәр менән йөрөгән. Эләксен тибындағы эттәр менән шәшкегә, бурһыҡҡа, һыуһырға һунар иткәндәр.

Элекке ваҡыттарҙа ялан башҡорттары бүрегә, төлкөгә һәм һыуһарға бөркөттәр ярҙамында ла һунарға сыҡҡан. XVIII быуаттың икенсе яртыһында ла башҡорттарҙың ҡоштар ярҙамында һунар итеүе тураһында мәғлүмәт бар.

Башҡорттарҙың һунарсылығына күҙәтеүҙе тамамлап, һунарсының ҡоралланыуына, артель һунарына һәм һунар территорияһына ла туҡталып китергә кәрәк. Башҡорттарҙың һунар өсөн махсус кейеме булмаған (башымлы ҡынйыраҡ менән бышымлы сабатаны иҫәпкә алмағанда). Был аяҡ кейеме атлап йөрөгәндә лә, саңғыла шыуғанда ла уңайлы булған. Быға тиклем яҙған һунар ҡоралдарынан тыш, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары аҙыҡ-түлек һалыу йәки үлтерелгән кейекте һалыу өсөн махсус ҡулайлама - алап аҫып йөрөткән. Алап - дуға рәүешендә бөгөлгән талға үрелгән йүкәнән һәм уның эске яғынан туҙ ҡуйып тегелгән һауыт.

Тарихи документтарҙа башҡорттарҙың һунарға ҙур булмаған төркөмдәр менән сығыуы теркәлә. Бындай һунар януарҙы ҡырпаҡ ҡар өҫтөнән, бүреләрҙе һыбай баҫтырғанда, ыласын һунарында урын алып торған. Ҙур хайуандарға - болан йәки мышыларға башҡорттар күп кешелек артелдәр менән һунар иткән һәм ҡайһы берҙә хайуанды аҙналар буйына эҙәрлекләгәндәр. Үлтерелгән хайуандың ите һунарҙа ҡатнашыусылар араһында тигеҙ итеп өлөшләнгән.

Башҡорттар йәшәгән территория борондан уҡ айырым ҡәбиләләр араһында бүленгән. Башҡорттарҙың рус подданныйлығына күсеүе менән был ерҙәргә хоҡуҡ айырым ырыуҙарға беркетелгән. Ырыу ерҙәре аймаҡтарға бүленгән. Аймаҡтар эсендә түбәләр ҙә булған. Ерҙәрҙе бүлгеләү, ваҡлау артабан да дауам иткән һәм һәр ғаилә үҙенең еренә эйә булған. Һунарсылыҡ кәсебе ерҙәре ошо ғаиләнең, дөрөҫөрәге, уның яһаҡ түләгән башлығының йәки туғандаш ғаиләләрҙең милке булып торған. Махсус яҙмалар буйынса аҫаба ерҙәренә дөйөм идара итеү хоҡуғында ҡәрҙәштәр йәки сит кешеләр индерелгәс, артабан был хоҡуҡтар күберәк кешеләр төркөмөнә таралған. Әммә һәр ваҡыт, тотолған йәнлек оброкка тапшырыла икән, билдәле бер аҫаба ерендә припущенник йәки ҡуртымға алыусы ниндәй шарттарҙа йәнлек аулай алыуы ентекле билдәләнгән.

Башҡорттар XVII-XVIII быуаттарҙа төркөмдәр менән күрше ҡаҙаҡтарҙың йәки ҡалмыҡтарҙың ерҙәренә һунарға сыҡҡан һәм йыш ҡына бындай һунар хәрби бәрелеш менән тамамланған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Таҙартыу эштәре еңелдәрҙән булманы. Ниндәй генә граффитиҙар юҡ ине бында: майлы буяуҙар, күмер, ҡором, элекке химик ҡәләм, хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирен помадаһы менән дә сыймаҡлағандар.***

**(Башы 1-се биттә).**

**Күрәһең, ошо эшкә баҙнат итеп тотона алыусы шәхестәр булмағандыр...**

- Ошондай ҡомартҡыларҙы һаҡлау айырым кешеләрҙән генә тормай, был - дәүләт кимәлендәге мәсьәлә. Тәбиғи, тарихи-мәҙәни ҡомартҡыларҙы һаҡлау сараларын ғәмәлгә ашырмаһаң, уларҙың тамам юҡҡа сығыуы бар. Ошоға миҫал рәүешендә хәҙерге Силәбе өлкәһендәге Игнатьев мәмерйәләрен килтерергә була. Башҡорттар уны Ямаҙыташ тип атаған. Быны яҙмалы таш, тип тә аңлатырға була. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ унда яҙмалар, һүрәттәр булыуын белгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар юғалғанға иҫәп, сөнки ваҡытында был мәмерйәлә урыҫ монахы Игнатий йәшәгән, йыл әйләнәһенә усаҡ яғылып, уның ҡоромо стеналарҙы ҡаплаған, берәҙәк монах янына килеп йөрөүселәр ҙә күп булғандыр. Унан һуң, ҡырағай туристар һәр саҡта ла үҙҙәрен вандалдарса тота, стеналарға граффитиҙар төшөрә һ.б. Ә беҙҙең Шүлгәнташтағы мәмерйә... ренсе бурысыбыҙ итеп ҡуйҙыҡ.

Башҡортостан етәкселеге кимәлендә ул 2012 йылдан башлап күтәрелде. ЮНЕСКО - Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының махсус органы, ниндәйҙер бер мәҙәни мәсьәләне уның аша хәл итеү өсөн алдан әҙерлек эштәрен башҡарыу фарыз. Иң элгәре киң матбуғат саралары аша Шүлгәнташ буйынса төрлө мәғлүмәттәр бирҙек, үҙебеҙҙең ижтимағи мөхиттә Шүлгәнташты бөтөн донъя кимәлендә танытыу мәсьәләһе киң хуплау тапты, ғалимдарыбыҙ, зыялыларыбыҙ күтәргән проблема республика етәкселеге иғтибарынан ситтә ҡалманы. Ул саҡтағы БР Хөкүмәтенең вице-премьеры Лилиә Ғүмәрова, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова булышлығында Шүлгәнташтағы палеолит дәүере һүрәттәрен ЮНЕСКО-ның алдараҡ ҡарала торған исемлегенә индереү мәсьәләһе хәл ителде. Был донъя кимәлендәге ойошмаға Башҡортостандан үҙенә күрә бер ғариза яҙыу һымаҡ була инде.

2013 йылда беҙҙең ҡомартҡы менән танышыу өсөн ЮНЕСКО киттек. Иң тәүҙә Испанияға йүнәлдек. Унда Альтамира мәмерйәһе музейы бар, ундағы һүрәттәр шулай уҡ палеолит осорона ҡарай. Беҙҙе музей директоры Хосе Антонио Лачерас бик ихлас ҡаршы алды: йөҙөндә ныҡ аптырағанлығы ла сағылыш тапҡан. Шүлгәнташты беләләр, насар хәлдә икәне лә уларға билдәле, ә бына ошо ауыр эште башҡарып сығырға теләгәндәрҙең үтә йәш булыуына аптырағандыр инде. Ул беҙгә әйтә: "Бында бер ҡасан да Рәсәй ғалимдарының килгәне булманы, һеҙ, йәш кешеләр, ни өсөн беҙҙең музейға килергә булдығыҙ ул?" Музей менән танышырға, мәмерйәне ҡарап сығырға, үҙебеҙҙә лә бындағы һымаҡ мәҙәни объектты булдырыу ниәте менән килеүебеҙ хаҡында белдерҙек. Музейҙағы экспонаттарҙы ҡарап сыҡтыҡ, мәмерйәгә лә индерҙеләр. Реставрация тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, директор шулай тине: "Европала һеҙгә бер генә кеше ярҙам итә ала - ул Андоррала йәшәүсе реставратор Эудаль Гийамет". Ул шундуҡ ошо реставраторға шылтыратты, Рәсәйҙән килгән ҡунаҡтарҙың йомош-үтенестәре хаҡында ла хәбәр итте. Асыҡ күңелле директор беҙгә музей документтарының күсермәләрен бирҙе, уның ғилми эш буйынса консультанты үҙ кәңәштәрен еткерҙе. Испанияла башҡа мәмерйәләрҙе ҡарап сыҡҡас, автобус менән Францияға киттек. Ласко музейын ҡараныҡ. Унда билдәле тикшеренеүсе, археолог Жан-Жак Климер шулай уҡ беҙҙе ихлас ҡаршы алды, йәнә музейҙы һаҡлаусы Жан-Мишель Женест менән осрашып һөйләштек. Улар ҙа бик аптыраны, беҙгә бындай эш менән быға саҡлы Рәсәйҙән бер кеше лә килеп йөрөмәне, тиҙәр. Улар ҙа ярҙамға әлеге Андорра реставраторы Эудаль Гийаметты саҡырырға кәрәк булыр, тине. Францияна ошо кешегә шылтыратып һөйләштек, ул беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә риза булды. "Әлегә буштан-бушҡа йөрөмәгеҙ, 2015 йылдың йәйендә буласаҡ ғилми конференцияға саҡырабыҙ, шунда Шүлгәнташ менән танышырһығыҙ", - тинек.

ебәреп, Эудаль Гийамет етәкселегендә йылына ике тапҡыр - яҙ һәм көҙ айҙарында - мәмерйәлә таҙартыу һәм реставрация эштәрен башҡарҙыҡ.

Быға саҡлы ошондай реставрация эштәренең ни тиклем ҡатмарлы булып, иҫ китмәле түҙемлек талап итеүен белмәй инек. Әнә менән ҡойо ҡаҙыу кеүегерәк булды инде ул. Мәмерйәнең 120 кв м майҙаны таҙартылды. Таҙартыу эштәре еңелдәрҙән булманы. Ниндәй генә граффитиҙар юҡ ине бында: майлы буяуҙар, күмер, ҡором, элекке химик ҡәләм, хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирен помадаһы менән дә сыймаҡлағандар. Мәҙәни кимәлдең түбән булыуы вандализмға килтерә лә инде. Иң ауыры - химик ҡәләм эҙҙәрен юйыу булғандыр - улар стеналарға ныҡлап һеңешкән ине.

Реставрация эштәре менән бер үк ваҡытта тутламай торған ҡоростан баҫҡыстар эшләттек, мәмерйәнең барса ҡаттарына, залдарына мониторинг системаһы ҡорамалдарын ҡуйҙырҙыҡ.

сакраль һүрәттәрен табыныу өсөн төшөрөүҙәре мөмкин. Унан һуң, беҙ таш быуат кешеләрен йөн баҫҡан, тире ябынып йөрөгән итеп күҙалларға күнеккәнбеҙ. Ә улар кейем тегә белгән. Беҙҙең музейыбыҙҙа ошондай кейем өлгөһө ҡуйылған: тире салбар, оҙон тоҡ рәүешле өҫ кейеме һәм капюшон, аяҡтарында ла тире ситек. Бындай кейем һалҡын ҡыш көндәрендә кешеләр өсөн бик уңайлы булған. Энәне һөйәктән эшләгәндәр, еп урынына мал һеңере ҡулланылған. Әйткәнемсә, бындай боронғо ҡомартҡылар бик һирәк: Испанияла, Францияла электән билдәле, яңыраҡ Балканда ла табылды шундай һүрәтле мәмерйә..

**Заманында Шүлгәнташ мәмерйәһенә кем етте шул, нисек етте - шулай кереп йөрөнө. Шуның һөҙөмтәһендә мәмерйә шулай бысранған да инде. Тимәк, был процесты мәҙәниләштереү өсөн музей төҙөү зарур ине. Был мәсьәлә нисек хәл ителде?**

# БАШҠОРТОСТАН ДАНЫ -

## йәки эпостарға

гәнташыбыҙҙы башҡорттар һаҡлап ҡала алған, сөнки улар уның сакраль әһәмиәтен яҡшы аңлаған.

**Шүлгәнташты Көньяҡ Урал тәбиғәте үҙе һаҡлаған, ҡурсалаған, тип тә әйтергә булалыр.**

- Эйе, ошо мәмерйәбеҙ үҙе бер мөғжизәле урын бит. Беренсенән, уның эсендә йыл әйләнәһенә һауа температураһы 5-7 градус кимәленән артмай, икенсенән, мәмерйәнең стенаһынан быуаттар буйына ағып торған һыу һүрәттәрҙе йоҡа ғына, ҡайһы бер урындарҙа 2 - 4 см ҡалынлығындағы кальцит менән ҡаплаған. Һис бер арттырыу түгелдер: Шүлгәнташты Аллаһы Тәғәлә үҙе һаҡлап алып ҡалған, тип әйтер инем.

**Айырым кеше ғүмерендә лә, йәмғиәттә лә ниндәйҙер хәл-ваҡиға билдәле бер ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн тейешле шарттар барлыҡҡа килгәс кенә, йәғни, мәсьәлә, проблема кешеләрҙең, йәмғиәттең аңында һәм үҙаңында "өлгөрөп" еткәс кенә бойомға аша. Шүлгәнташыбыҙҙы донъя кимәлендә рәсми рәүештә танытыу мәсьәләһе лә бына шулай өлгөрөп еткәндер инде...**

- 2010 йылда, Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры булып килгәнемдән һуң, ойошмабыҙҙың төп миссияһын, төп бурысын билдәләп, шуны үтәй алырлыҡ команда туплай алдыҡ. Беҙ иң боронғо, иң ҡиммәтле, иң ҙур ҡомартҡыларыбыҙҙы һаҡлау һәм дөрөҫ файҙаланыу мәсьәләһен төп миссиябыҙ итеп алырға һүҙ ҡуйыштыҡ. Ҙур эш башҡарып сыға алһаҡ, абруйыбыҙ ҙа юғарыраҡ булыр, тип фекер йөрөттөк.

Шүлгәнташ проблемаһын хәл итеүҙе тап ошо ваҡытта иң бе-

экспертары килде. Уларҙы Шүлгәнташҡа алып барҙыҡ. Тикшереү тамамланды, эксперттар үҙҙәренең һығымтаһын иғлан итте. Әлбиттә, улар бындағы һүрәттәрҙең уникаль булыуын инҡар итмәне. Әммә "Шүлгәнташ мәмерйәһе - Европалағы иң бысраҡ мәмерйә, ошо килеш уны ЮНЕСКО исемлегенә бер нисек тә индереп булмай", - тинеләр улар. Икенсенән, мәмерйә эсендәге баҫҡыстар шул тиклем иҫкергән, ҡаҡшаған, тутығып, яртылаш сереп бөткән. Италиянан килгән эксперт былай тине: "Әгәр мин экскурсияға килгән кешеләрҙе ошо баҫҡыстарҙан йөрөтһәм, мине төрмәгә ябырҙар ине". Өсөнсөнән, мәмерйәлә махсус мониторинг системаһын булдырыу талап ителә, ә ул беҙҙә юҡ. Мәмерйәне мотлаҡ ябыу һәм таҙарта башлау менән бер рәттән, уның янында төҙөләсәк музей проекты өҫтөндә эште башлап ебәреү кәрәк булды. ЮНЕСКО эксперттарының талаптарын үтәмәйенсә тороп, яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшә алыу мөмкин булмаҫ ине.

**Эште ниҙән башлап ебәрҙегеҙ?**

- Элегерәк тарихсыларыбыҙ, археологтарыбыҙ: "Беҙҙең Шүлгәнташ Европалағы мәмерйәләрҙән һис кәм түгел ул!" - тип маҡтанһа ла, уларҙың береһе лә шул уҡ Альтамира, Ласко, Шове кеүек мәмерйәләрҙе барып күрмәгән. Беҙҙә тәбиғәт ҡомартҡыларын нисек таҙартырға икәнен, музей комплексы ниндәй булырға тейешлеген бер кем дә белмәй. Ә ундай белгестәр Европала барҙар. Өфөлә йә иһә Бөрйәндә ултырып ҡына нисек итеп ҡомартҡыны таҙартырға, мониторинг системаһын ҡорорға, музей эшләргә икәнен белеп булмай.

Ике йәш архитектор - Рөстәм Әлибаев, Гөлфиә Тажетдинова менән өсәүләп Европаға сығып

Илебеҙгә ҡайтыу менән Өфөлә ошо мәсьәлә буйынса халыҡ-ара симпозиум ойоштороп, эшебеҙҙе башлап ебәрҙек. Рәсәйҙә мәмерйә стеналарына төшөрөлгән һүрәттәрҙе реставрациялау буйынса тәжрибә лә, ышаныслы белгестәр ҙә юҡ. Шуға күрә реставрация эштәрен башлап ебәреү өсөн Бөрйәнгә Испаниянан, Францияна белгестәрҙе саҡырҙыҡ. Бәләкәй генә ҡунаҡханалар төҙөп өлгөрҙөк, ҙур булмаған экспозициябыҙ ҙа бар ине. Эудаль Гийамет әйтә: "Был бик ҡыҙыҡлы, әммә үтә ауыр эш. Францияна килтерелгән реставраторҙар һеҙгә бик ҡиммәткә төшәсәк, шуға күрә бер нисә кешене үҙем өйрәтәсәкмен". Беҙ 5 кешенән торған эшсе төркөмдө уның ҡарамағына бирҙек. 2017, 2018, 2019 йылдарҙа Шүлгәнташҡа махсус экспедиция

**Көңгөр боҙ мәмерйәһендә яҡтыртыу системаһы ҡоролған, ул мәмерйәне ҡарарға килеүсе туристар өсөн эшләнгән. Шүлгәнташта яҡтыртыу системаһы бармы?**

- Юҡ, яҡтыртыу лампалары мәмерйәнең микроклиматына зарар килтерәсәк. Беләһегеҙ инде, мәмерйә эсенә ҡояш нурҙары төшмәй, унда - абсолют ҡараңғылыҡ, меңәр йылдар дауамында шулай булған. Әгәр мәмерйәне электр уты менән яҡтыртһаң, бында ғүмерҙә лә булмаған бөжәктәр, башҡа төрлө йән эйәләре инә башлаясаҡ, ә был мәмерйәнең микроклиматына кире тәьҫир итәсәк. Белгестәр, ғалимдар ҙа бында ҡул һәм маңлай фонариктары менән генә инә.

2017 йылда стеналағы кальциттың бер өлөшөн алған саҡта дөйә һүрәте асылды. Был һүрәттең бер өлөшө 60-сы йылдарҙа асылған булған (дөйәнең артҡы аяҡтары), әммә тотош таҙартылмаған, кеше һүрәтелер тип, антропоморф тип нарыҡлағандар. Эудаль беҙгә әйтә: "Был һүрәт тотош асылмаған, һаҡ ҡына таҙартығыҙ". Йоҡа кальцит ҡатламын стоматологияла ҡулланылған бормашина менән таҙарттыҡ. Был һүрәт хәҙер - донъялағы иң боронғо дөйә һүрәте. Күрәһегеҙ, дөйәләрҙе беҙгә Урта Азиянан алып килмәгәндәр, улар таш быуатынан бирле Уралда йәшәгән.

**Боронғо кешеләр мәмерйә стеналарына ни сәбәпле ҡырағай хайуандарҙы төшөргән икән?**

- Мамонттар, носорогтар, ҡырағай аттар, дөйәләр - таш быуат кешеләре өсөн аҙыҡ сығанағы, уларҙың күп булыуы ул дәүерҙәге тормош торошон билдәләгән. Кешеләрҙең шул йәнлектәрҙең

- Иң элгәре Рөстәм Әлибаев етәкселегендә йәш архитекторҙарыбыҙ проект эшләй башланы. Проекттың инженер-конструкторы - Исфаҡ Аҡтуғанов, фәнни эште археолог Николай Григорьев алып барҙы. Дизайн эштәрен Тимур Сабитов етәкләне. Проект 2018 йылға әҙер булды, дәүләт экспертизаһын да уңышлы үттек. Экспозицияларҙы эшләргә башҡа музейҙар хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеп торманыҡ - быны ла яңыса, заманса итеп башҡарыу теләге көслө булды. Белгестәребеҙҙе сит ил музейҙары экспозициялары менән танышыу өсөн Испанияға, Францияға, Швецияға, Данияға, Төркиәгә командировкаларға ебәрҙем. Ундағы музей етәкселәре, төп белгестәре менән осрашырға, кәңәш һорарға, заманса технологияларҙы өйрәнергә кәрәк булды. Унан һуң, ғилми конференциялар ваҡытында музей проектын билдәле ғалимдарға күрһәтеп, уларҙың тәҡдимдәрен проектҡа индерә барҙыҡ.

Музей комплексын 2018 йылда төҙөй башлап, 2022 йылда тамамланыҡ. Комплекс төҙөүгә йәлеп ителгән белгестәр бик тырышып, барса эштәрҙе ихлас башҡарҙы, берҙәм команда булып ойоша алдыҡ. 10 йыл дауамында барған эшебеҙҙең төп маҡсаты - ЮНЕСКО эксперттарының ошондай объекттарға ҡарата булған барса талаптарын үтәү.

Донъя булғас, төрлө хәлдәр, ситуациялар килеп сыға. 2018 йылға тиклем эшебеҙҙә тотҡарлыҡтар ҙа булды, аҡса етмәй, республика етәкселеге лә беҙҙең объекттан "һыуына" биргәйне. Ә бит эшебеҙ башланыр алдынан аҡса бик аҙ бүленде. "Егеттәр, музей төҙөүҙе нисек итеп булһа ла башлап ебәрәйек, башланған

***✓ Рухһыҙ йәшәү башҡорт менталитетына бөтөнләйгә тап килмәй. Тап ошондай мәлдәрҙә халҡыбыҙҙы дәртләндереп, изге өмөттәр уятып, рухи күтәренкелеккә ерлек биргән хәл-ваҡиғалар булыуы зарур.***

# ШҮЛГӘНТАШ,

## торорлоҡ таш һәйкәл ул



эш - бөткән эш, тип әйтәләр бит, аҙаҡтан күҙ күрер", - тинем үҙемдекеләргә. Радий Фәрит улы килгәс, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Ул үҙе Шүлгәнташҡа килеп, барыһын да үҙ күҙҙәре менән күреп, эшебеҙҙе хуплап ҡайтты. Хуплап ҡына ҡалманы, материалдар менән тәьмин итеү буйынса, финанс сығымдары яғынан да эшебеҙ өсөн уңайлы шарттар булдырҙы. Эшебеҙ ыңғайға китте шулай. Рәсәйҙә ошондай типтағы музей төҙөү тәжрибәһе юҡҡа иҫәп, барыһын да үҙебеҙҙең белгестәребеҙ - архитекторҙар, дизайнерҙар башҡарҙы. Үҙебеҙҙең проект буйынса барса эштәрҙе Башҡортостанда тыуып үҫеп, үҙебеҙҙә белем алған йәш кешеләр - Рөстәм Әлибаев, Гөлфиә Тажитдинова, дизайнер Тимур Сабитов, "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры Фәүзил Маликов, проекттың ғилми етәксеһе Николай Григорьев башҡарҙы. Бик матур экспозициялар эшләнде, төп экспонаттарҙы - мәмерйә стенаһындағы һүрәттәрҙең теүәл, бермә-бер үлсәмдәрендәге күсермәләрен - Францияла, ундағы бер оҫтаның ательеһында эшләттек. Ғөмүмән, эш барышында Рәсәй һәм башҡа сит ил белгестәренең кәңәштәрен һәм консультацияларын гел иҫтә тоттоҡ.

**Эштәрегеҙҙе тамамлағас, йәнә сит ил эксперттарын саҡырырға тура килгәндер?**

- Эйе, былтыр беҙҙең эштәребеҙгә баһа биреү маҡсатында Ҡомартҡыларҙы һәм иҫтәлекле урындарҙы һаҡлау буйынса халыҡ-ара совет (ИКОМОС) эксперттары килгәйне. Улар биргән баһа бик юғары булды, сөнки ЮНЕСКО тарафынан ҡуйылған барса талаптар үтәлгән: мәмерйә таҙартылған, реставрация эштәре һәйбәт башҡарылған, мониторинг системаһы эшләй, объект хәүефһеҙлек саралары менән тәьмин ителгән, мәмерйә ябылған, уның тирәләй буфер (һаҡлау) зонаһы ҡаралған, Европа кимәлендәге музей сафҡа индерелгән, тейешле инфраструктура булдырылған һәм музейға тиклем асфальт түшәлгән юлдар ҙа һалынған. ИКОМОС эксперттары урындағы халыҡтың ошо объектҡа ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булыуын да белеште. Унан алдараҡ Шүлгәнташҡа яҡын булған Ғәҙелгәрәй ауылын ни өсөн буфер зонаһына индермәүебеҙ тураһында һорауҙар булғайны. ЮНЕСКО талаптарына ярашлы, урындағы халыҡҡа уңайһыҙлыҡтар булмаҫҡа тейеш. Әгәр беҙ әлеге ауылды һаҡлау зонаһына индерһәк, унда йәшәгән кешеләргә ауыл хужалығы, төҙөлөш эштәре менән шөғөлләнеү рөхсәт ителмәҫ ине, ә был үҙе үк ризаһыҙлыҡ тыуҙырасаҡ. Унан һуң, ошо ауыл "Шүлгәнташ" тәбиғи ҡурсаулығына яҡын урынлашҡан, бында уның менән бәйле һаҡлау ҡағиҙәләре теүәл үтәлә. Шуларҙы аңлаткас, эксперттар ҙа ризалашты. ИКОМОС быйыл май аҙағында, Шүлгәнташтың палеолит дәүере һүрәттәрен ЮНЕСКО-ның бөтөн донъя ҡомартҡылары исемлегенә индереү буйынса номинация талаптарына тура килеүен билдәләп, ыңғай һығымта яһаны. Был һығымтала иң мөһиме бына нимә: Шүлгәнташ һүрәттәре күренекле универсаль ҡиммәттәр (ВУЦ - выдающаяся универсальная ценность) иҫәбенә инә һәм ул ЮНЕСКО номинацияһына тәҡдим ителә, тиелә.

**ЮНЕСКО-ға тәҡдим ителгән номинациялар уның сессияһында махсус комитет ағзалары тарафынан ҡарала. Уға нисек әҙерләндегеҙ?**

- Тулҡынландыҡ, әлбиттә. Ошондай сессия йылына бер тапҡыр ғына уҙғарыла, ул быйыл Болгарияла үтергә тейеш ине, әммә билдәле бер сәбәптәр арҡаһында Парижға күсерелде. Европала сәйәси ситуация беҙҙең мәнфәғәттәргә тап килмәй бит инде - Башҡортостан исеме артында Рәсәй тора, сәйәсмәндәрҙең дә ҡыҫылыуы мөмкин бит. Шуға күрә ныҡлап әҙерләндек.

**Нимәләр алып барҙығыҙ Парижға?**

- Нимәләр, тип, башҡорт балын инде. Башҡорт ҡунаҡҡа барғанында ла күстәнәсһеҙ йөрөмәй бит. Шүлгәнташ номинацияһы буйынса барса документтар, фотолар, видеофильмдар күптән ЮНЕСКО-ға ебәрелгәйне. Үҙебеҙ менән яңы баҫылған брошюраларҙы, РФ Сит илдәр министрлығы грифы аҫтында сығарылған, Башҡортостан тураһында материалдар баҫылған ҙур альманахты, Шүлгәнташтың бик матур итеп төшөрөлгән фотоһүрәттәре альбомын, "Шүлгәнташ" музейына саҡырыу ҡағыҙҙарын алып барҙыҡ.

**Сессия ниндәй телдәрҙә алып барыла?**

- Ике телдә - инглиз һәм француз телдәрендә, наушниктар аша русса синхрон тәржемә бирелә. Беҙ ике төркөмгә бүлендек - берәүҙәр сессия барышын ентекләп тыңлап барһа, икенселәр башҡа илдәрҙең, бигерәк тә әлекке Урта Азия республикалары вәкилдәре менән осрашты, яҡындан тороп аралашты. Сессияға беҙҙекенә оҡшаш номинациялар байтаҡ сығарылғайны. Номинация нисек ҡарала, ниндәй һорауҙар бирелә - барыһын да теркәп барып, уларға алдан уҡ яуаптар әҙерләп ҡуйҙыҡ. Ҡарау, тикшереү процедураһына ярашлы, һәр номинацияны ИКОМОС вәкиле тәҡдим итә, номинацияһы ҡаралған ил делегацияһына һорауҙар бирелә, улар яуап ҡайтара. Иң аҙаҡтан ИКОМОС эксперты йә ыңғай, йә кире һығымтаһын иғлан итә: исемлеккә индереү-индермәү тураһында совет ҡарарын белдерә. Шунан һуң ЮНЕСКО комитетына ингән 22 ил вәкилдәре тауыш бирә: номинация тауыш биреүселәрҙең өстән ике өлөшөнөң ыңғай баһаһын алһа, ул исемлеккә индерелә. Ҡайһы бер илдәрҙең номинациялары сәғәт ярым дауамында ҡаралды, сөнки комитет ағзаларының һорауҙары күп булды. Ҡайһы бер номинацияларға ИКОМОС-тың кире баһаһы булһа ла, уларҙың вәкилдәре комитет ағзалары менән алдан бәйләнешкә сығып, уларҙы төрлөсә өгөтләп, "дипломатик" юл менән ниәттәренә өлгәшә. Юҡтан ҡоҙағый булалар инде.

**Беҙҙең номинация нисек үтте?**

- Ике көн буйына көсөргәнешле хис-кисерештәр менән беҙҙең номинацияға сират етеүен көттөк. Башҡортостандан 6 кеше инек, һәр ҡайһыбыҙҙың тулҡынланыуы йөҙөнә сыҡҡайны. Беҙгә Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эргәһендәге даими вәкиле, Рәсәйҙең ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Ринат Жәфәр улы Аляутдинов һәм уның ярҙамсылары ныҡлы терәк булды. Ул - мосолман кешеһе, беҙҙең менән ихлас аралашты, ошо миссиябыҙҙы үҙенең бурысылай ҡабул итте. Шулай уҡ Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Төркиә вәкилдәре менән һөйләшеп, уртаҡ тел таптыҡ, улар беҙҙең номинацияға теләктәшлек белдерҙе. "Ҡайҙа ғына барма, дуҫ-иш кәрәк, ҡаршы сығып атың бәйләргә", - тип юҡҡа ғына йырламаған ата-бабаларыбыҙ.

Ниһайәт, 12 июлдә, сәғәт 5 тулыуға, беҙҙең сират етте. ИКОМОС вәкиле 7-8 минут дауамында Шүлгәнташтың палеолит дәүере һүрәттәре, был ҡомартҡыны һаҡлау өсөн ЮНЕСКО тарафынан ҡуйылған талаптарҙың үтәлеше хаҡында мәғлүмәт бирҙе, номинациябыҙҙың күренекле универсаль ҡиммәт булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм уны ЮНЕСКО исемлегенә индереүҙе хупланы. Сессияны алып барыусы Болгария вәкиле комитет ағзаларына һорауҙар бирергә тәҡдим итте, әммә уларҙың беҙҙең номинация буйынса бер генә һорауы ла булманы. Һөҙөмтәлә Шүлгәнташ бер тауыштан ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мәҙәни һәм тәбиғи мираҫы исемлегенә индерелде. Ринат Аляутдинов - Рәсәй Федерацияһы, мин Башҡортостан Республикаһы исеменән ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы буйынса комитетына рәхмәт белдерҙек. Сессияла ҡатнашыусыларҙы Шүлгәнташты үҙ күҙҙәре менән күреп, яҡындан танышып ҡайтырға саҡырҙым. Процедура 15 минут эсендә тамамланды, төрлө илдәрҙең вәкилдәре беҙҙе ошо ҡаҙанышыбыҙ менән ихлас ҡотланы. Шулай итеп, беҙҙең 13 йыл буйына арымай-талмай алып барған эшебеҙ ҙур уңыш менән тамамланды.

**Үҙ илеңдең ҡомартҡыһын бөтөн донъя кимәлендә танытыуға, халыҡ-ара ойошманың юғары баһаһына өлгәшеүҙең әһәмиәте нимәлә?**

- Беренсенән, ул илдең халыҡтар, илдәр араһындағы престижын, мәҙәни яҡтан абруйын күтәрә. Икенсенән, мәҫәлән, Башҡортостанда, Рәсәйҙең үҙәгендә бынан 20 мең йыл әүәл мәҙәнилек хасил булыуын күрһәткән ҡомартҡы булыуы бар донъяға иғлан ителә. Өсөнсөнән, ошондай боронғо ҡомартҡының йәмғиәт һәм дәүләт тарафынан һаҡланыуы республикабыҙҙа, тотош Рәсәйҙә тәбиғи, тарихи һәм мәҙәни мираҫ объекттарына заманса, цивилизациялы ҡараш булыуын раҫлай. Дүртенсенән, ЮНЕСКО тарафынан күренекле универсаль ҡиммәт тип баһаланған, бөтөн донъя тәбиғи һәм мәҙәни мираҫы исемлегенә ингән объекттар халыҡ-ара ойошманың туристик белешмәләренә лә индерелә, ә был беҙгә сит ил туристары ағымын бермә-бер арттыра барыу мөмкинлеген бирә. Ошо ҡаҙанышты донъя кимәлендәге реклама, тип тә баһалап булыр ине. Сит ил кешеләре ЮНЕСКО-ның туристик реестрына күҙ һала, быға са Башҡортостан, уның Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһе, музейы хаҡында бер нәмә лә белмәгән бәғзе берәүҙәр ошо уникаль объектты үҙ күҙҙәре менән күрергә теләйәсәк. Йәнә Көньяҡ Уралдың иҫ китмәле тәбиғәте лә туристарҙы ылыҡтырып торасағына шик юҡ.

**XIX быуатта йәшәгән күренекле мәғрифәтсебеҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың һәр бер башҡорт кешеһенә төбәп әйтелгән бер васыятын иҫкә алмай булмай: аҫаба башҡорт нәҫел-нәсәбен, ырыуын, күк йөҙөндәге йондоҙҙарҙы һәм боронғо хандарыбыҙ хаҡындағы өләңдәрҙе (эпик хикәйәттәрҙе) белергә тейеш. Шүлгәнташ мәмерйәһе халҡыбыҙҙың иң боронғо, архаик мифологияһы менән бермә-бер бәйле: уны Урал батыр, Аҡбуҙат эпостарынан айырып ҡарап булмай. Тимәк, беҙ, XXI быуат башында йәшәүсе зыялылар, халҡыбыҙҙың матди һәм мәҙәни мираҫын киләсәк быуындарға ла теүәл тапшыра алһаҡ, уларҙың башҡорт рухына тоғро ҡалыуына өлгәшер инек.**

- Эйе, халҡыбыҙ борон-борондан тормоштоң бары тик матди яғын ғына ҡайғыртып йәшәмәгән, боронғо эпостарыбыҙ, йыр-ҡобайырҙарыбыҙ, сәнғәтебеҙ, шул уҡ Шүлгәнташыбыҙ ошоға дәлил. Рухһыҙ йәшәү башҡорт менталитетына бөтөнләйгә тап килмәй. Беҙ Көньяҡ Уралда йәшәйбеҙ, ситтән килеүселәр Башҡортостаныбыҙҙы ожмах баҡсаһына тиңләй, тәбиғәтебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ менән байбыҙ. Заманаларҙың төрлө сағы була, әле лә ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар етерлек. Тап ошондай мәлдәрҙә халҡыбыҙҙы дәртләндереп, изге өмөттәр уятып, рухи күтәренкелеккә ерлек биргән хәл-ваҡиғалар булыуы зарур. Шүлгәнташыбыҙҙың бөтөн донъя кимәлендәге рухи-мәҙәни мираҫ рәүешендә рәсми танылыуын иң кәмендә ике мең йыллыҡ этник тарихы булған халҡыбыҙға бирелгән оло баһа итеп ҡабул итәйек.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**13 йыл дауамында барған Шүлгәнташ эпопеяһы тамам. Ошондай оло ҡаҙанышҡа өлгәшкән милләттәштәребеҙ халҡыбыҙ алдындағы изге бурысын намыҫ менән үтәне. Уларҙың хеҙмәте дәүләтебеҙҙең юғары баһаһына лайыҡ булды. Данир Әхмәҙи улын һәм уның командаһы ағзаларын редакция исеменән ихлас ҡотлайбыҙ, алда торған ижади эштәрендә яңы уңыштар теләйбеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Бер кем дә һине, ут төрткән, аҡса урлаған, тимәне. Бөтә ғәйебең - шиктәреңде ваҡытында тикшереү органдарына әйтмәүеңдә. Бәлки, ғәйеплеләр табылыр ҙа ине. Хәйер, улар табылды ла инде...***




-Комиссияға кассир менән баш бухгалтерҙың инеүҙәрен, кассирҙың төргәк тотоп сыҡҡанын әйттеңме?

- Юҡ.

- Ниңә?

- Әллә? Улар бит аҡса тураһында һорашманы. Унан, ул төргәктә нимә икәнен ҡайҙан беләһең? Бәлки. Унда аҡса ла булмағандыр? Бөткәнме ни ҡатын-ҡыҙҙың ваҡ-төйәге?

- Ваҡ-төйәк тип, барыбер ҙә ыштан-трусик тотоп сыҡмай бит инде. Һуңынан һин кассирҙың, әлдә аҡсаны ҡалдырмағанмын, әрәм була ине, тип һөйләгәнен ишеткәнең булманымы? Кеше, шул хәбәрҙе ысҡындырған, тип һөйләй бит.

- Әллә тағы. Иҫәрләнгәс, ысҡындырыуы ла ихтимал. Белмәйем. Психҡа әйләнгәс, әллә нимә лә һайрар ул. Барыһына ла ышана башлаһаң.

- Аҡылына зыян килгәс, нимә һөйләһә лә ярай тиһең инде? Ә бит юҡты һөйләмәй ул барыбер, башындағыһын, кисергәнен, мейеһенә һалынғанын һөйләй.

- Белмәйем, духтыр булмағас, әйтә алмайым. Уҡыған кешеләр һеҙ беләһегеҙ инде.

Өйҙә бер аҙға тынлыҡ урынлашты. Урамдан көлөшә-көлөшә йәш-елкенсәк уҙҙы, ауылдың теге осонда ярһып эт өрҙө, уға икенсеһе, унан өсөнсөһө ҡушылды, ҡайҙалыр алыҫта машина геүләне.

- Етмәҫме? - тине Билал кирелеп, унан Азамат менән Илгизгә ҡараш ташланы.

- Етер, - тине Сәми. - Уйнаныҡ, - Үҙе ҡабаланмай рюмкаһына үрелде, ҡуҙғалһаҡ, эселмәй ҡалмаһын, тип уйланы, ахыры. - Ысын судтағы бәндәләргә Аллаһ Тәғәлә ярҙам бирһен. Уйыны ла ҡара тирҙәр сығара.

- Юҡ инде, иптәш, башлағас, уйнап бөтәйек. Һин, Сәми ағай, шуны әйт, һуңынан әлеге кассир йәки баш бухгалтер аҡса, янған идара йорто хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡаны булманымы?

- Юҡ. - Сәми һорау алыуҙан ялҡҡайны инде, шуға күрә йыбанып ҡына яуапланы.

- Әйтәйек, һүҙ араһында, яңылыш?

- Әллә тағы? Уны кем иғтибарлап торһон? - Сәми бераууыҡ һүҙһеҙ ултырғандан һуң ҡыйыуһыҙ ғына өҫтәп ҡуйҙы. - Китеп ай ярым самаһы ваҡыт үткәс, бухгалтерҙан бер хат килгәйне.

Илгиздең күҙҙәре шар булды.

- Хат тей? Ниндәй хат?

- Ниндәй ти, ябай, ҡәҙимге хат. Әллә нимәһе юҡ ине. Шул эшендәме, теге ҡыҙ ни хәлдә, тигән. Кассирҙы һорай инде. Фартауай бәндәнең хаты ла үҙе һымаҡ эре, һауалы, ҡупыҡ ине. Һеҙҙә эшләгән саҡтарҙы һағынам, әллә кире бараһы, тигән булған. Быныһын мыҫҡыл итә тип аңларға кәрәк - килгәндең тәүге көнөнән алып ҡайтып киткәнсе, ошо ла булдымы колхоз, ошо ла булдымы район, тип яманлап йөрөнө.

Егеттәр аптырашта ҡалды, сөнки бындай хәбәрҙе һис көтмәгәйнеләр. Тимәк, Сәми асыла башланы. Илгиз, был әллә башын дүрәккә һаламы, әллә үҙе лә алышына башланымы, тип тә уйланы. Улай тиһәң, ҡылығында шикләнерҙәй бер ни ҙә юҡ һымаҡ. Хәйер, әлеге ҡараңғы ваҡиға төҫлө, Сәми үҙе лә серле бәндә ине.

- Яуап яҙҙыңмы һуң?

- Юҡсы, нимә тип, бәләһенән баш-аяҡ.

- Эх, әллә һин шул ҡәҙәре аңра, әллә дүрәк, - суд рәйесе, тәрән көрһөнөп, баш сайҡаны. - Дәлилдәр - ҡулында. Хат үҙе генә лә һине һағайтырға тейеш ине. Ул бит бындағы хәл-әхүәлде белешкән, кассирҙың хәлен һорашҡан, юлламайҙармы, белмәнеләрме, тапманылармы, тигән. Ә һин?... Бына уның осо ҡайҙа! Ана шул хатта, ана шул аҡсала - алтмыш меңде ҡулға төшөрөү өсөн яндырғандарын аңларға тейешһең дәһә! Кем белә, бәлки, унда колхоз етәкселәренең дә ҡыҫылышы барҙыр? Улар ҡоторҡан, был икәү эшләгән. Һуңынан аҡсаны бүлешкәндәр. Ә комиссияға нимә, килеп, кеше күҙенә күренеп, тикшергән-һораштырған булып киткәндәрҙер инде. Күҙ буяп. Көлгә әйләнгән идараны нисек тикшерәһең? Кабель боҙоҡ булыуын нисек белергә мөмкин? Фантастика! - Илгиз йөҙөн ҡапланы ла шарҡылдап, ниндәйҙер ят тауыштар сығарып көлдө. - Һинең күңелең, намыҫың үҙеңә комиссия булырға тейеш ине, Сәмиғулла ағай. Һин ошо ауылда йәшәйһең, кешеләр менән аралашаһың, колхоз һиненке, унда, атап әйткәндә, идара йортон төҙөүҙә һинең дә хеҙмәтең бар, шулай булғас, бындай битарафлыҡ ҡайҙан ул һиндә?.. Ниңә шиктәреңде район, район ярҙам итмәһә, Өфө прокурорына барып һөйләмәнең? Нисә йыл үтте, серҙең күбеһен һаман үҙеңдә йөрөтәһең. Эх, һин...

"Ғәйепләнеүсе" Сәмиғулла Боҫҡонов өндәшмәне, дәресен әҙерләмәй килеп уҡытыусынан әрләнгән уҡыусы ҡиәфәтендә аҫҡа ҡарап тик ултырҙы.

- Уҡып бөтөп кенә ҡайтайым әле, - Илгиз усын усҡа һуғып, сәстәренә йәбеште лә иҙән уртаһына сығып баҫты. - Күрәләтә, белә тороп... Бөтә факттар ҙа бар. Комиссия, имеш...

- Минән янғындан башҡа бер нәмә лә һораманылар, һорамағас ни, ниңә әйтәйем, үҙемә бәлә алып. Соҡсона башлаһалар? Мин бәләкәй кеше...

Быға тиклем үҙен нисек тә тыныс тоторға тырышҡан Илгиз был һүҙҙәрҙән һуң түҙмәне, күҙ асып йомған арала Сәмиҙең ҡаршыһына килеп тә баҫты.

- Бәләкәй кеше лә, бәләкәй кеше. Ваҡ кеше һин, ваҡ йән, бына һин кем...

- Ә һин ҡысҡырма! Хаҡың юҡ Һинең менән уйнап ултырған мин иҫәр. Уйын, имеш. Етте, бала-саға юҡ бында. Мин барығыҙҙан да олораҡ әле, - Сәми урынынан ҡалҡынды ла, нимәһендер эҙләп, тирә-яғына ҡаранды.

- Башың эшләмәгәс, һинең ололоғондан ни файҙа?

- Ҡуй, Сәмиғулла ағай, ысынға алма, уйын бит был, - Билал, һөйләшеүҙең кәрәкмәгән юҫыҡҡа төшә барыуын шәйләп, урынынан ҡалҡынды ла Сәмиҙе ҡултыҡлап алды. - Шаярыуҙы аңлаған кеше лә инде һин. Әллә ысын судта былай ғына асыулынышмайҙар тиһеңме? Ултыр әле берәйҙе һелтәйек, лутсы.

Билалдың юхалауы тәьсир иттеме, әллә үҙенең ҡыҙып китеүен аңланымы, Сәми ултырғысы тирәһендә баҫырға ятҡан ҡаҙ шикелле тапанды-тапанды ла эҙләгән әйберен таба алмай, урынына кире сүгәләне.

- Бер-беребеҙгә бәйләнешмәй генә ултырайыҡ. Юҡһа, кәнсәләргә үрт һалған, аҡсаны ла мин сәлдергән, тип ғәйепләргә самалайһығыҙ, - Сәми, балалар ише ауыҙын ослайтып, йөҙөнә үпкәләү ғәләмәте сығарҙы.

- Ғәфү ит, ҡыҙыбыраҡ кителде шикелле, ысынлап та, - тине Илгиз. - Бер кем дә һине, ут төрткән, аҡса урлаған, тимәне. Бөтә ғәйебең - шиктәреңде ваҡытында тикшереү органдарына әйтмәүеңдә. Бәлки, ғәйеплеләр табылыр ҙа ине. Хәйер, улар табылды ла инде, ни рәүешле эшләгәндәре һәм кемдәр эшләгәне генә билдәһеҙ. Ә кеше барыбер һиҙенә ул. Комиссия электрҙы ғәйепләһә лә, халыҡ бында кемдеңдер ҡулы уйнағанын тойомлай. Уйлап ҡара, кассир юҡҡа ғына психбольницаға эләккән, баш бухгалтер икенсе районға ҡасҡан тиһеңме? Ә был эшкә ҡоторҡан бәндә, моғайын да, арабыҙҙа йөрөйҙөр.

Дүртеһе араһынан шул кешене табырға тырышҡандай, Сәми берәм-берәм егеттәргә ҡарап сыҡты.

- Ярай, Илгиз, ағайға бик ябырылма әле. - Быныһы йәнә Билал тауышы. - Йә уйындан уймаҡ сығарырһың. Уның ни ғәйебе бар? Әйтте бит инде барыһын да. Милиция өйгә ордерһыҙ керә аламы, юҡмы, тигән һорауына суд яһаның да ебәрҙең.

- Ҡыҫылма! - Быға ҡәҙәр һөйләшеүгә бөтөнләй тиерлек ҡатышмаған Азамат ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Билал аңламайым, тигәндәй ҡулдарын йәйҙе лә яурындарын һикертте. Унан ауыҙ эсенән генә ниндәйҙер марш көйләп тышҡа, ҡорған сите аша ҡараңғылыҡҡа, ҡарап ултыра башланы.

- Йәнә саҡ ҡына ситкәрәк китәйек тә үҙенә күрә ҡайһы бер һығымталар яһайыҡ. Сәмиғулла ағай, уҡыйһыңдыр, һуңғы ваҡытта гәзит һайын тигәндәй бәрелешкән, төкөшкән поездар, пароходтар, аварияға осраған самолеттар хаҡында яҙалар. Радионан һөйләйҙәр, телевизорҙан күрһәтәләр. Техникаһы ярар, бына кешеләр йәл. Сәбәбе нимәлә тип уйлайһың? Күбеһенсә, бер йәки бер нисә бөртөк кешенең вайымһыҙлығы, яуаплыһыҙлығы арҡаһында. Ҡайһыһылыр йоҡлап киткән, кемелер посын ҡалдырған, эскән. Бына шуның һымаҡ, һин дә, Сәмиғулла ағай, кәрәк ваҡытта ситкә тайшанғанһың, әйтмәгәнһең, мин бәләкәй кеше тип йөҙ борғанһың. Һөҙөмтәлә идара йортона ут төртөүсе лә, аҡсаны үҙ кеҫәһенә һалыусы ла иректә йөрөп ята.

- Ну, һин инде бигерәк. Вис бутап бөттөң. Ул самолет, поезд, пароходтарҙа минең ни ҡыҫылышым бар һуң? Һин упсым ысын судтағы ише йәбешәһең, әйтерһең, уларына ла мин ғәйепле.

- Уларын мин былай ғына һөйләйем. Мин битарафлығыңа, йоҡоло күңелеңә барып теймәҫме, тип параллель килтерәм. Кем белә, намыҫың уяныр, бәлки. Бит, уйлап ҡараһаң, бөтөн ҙур ваҡиғалар ана шул ваҡтарҙан йыйыла. Әгәр ысын суд булһа, ул һине күптән рәшәткә артына ултыртыр ине.

- Ҡурҡытма! Уны ҡайҙан беләһең әле? Юрисмын, тигәс тә...

Илгиз шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Сәмиҙең үҙенең шәхесенә ҡағылырға маташыуы ҡыҙыҡ ине. Бер уйлаһаң, үҙҙәре лә хәс малайҙар инде, юҡ-барға үпкәләшеп баралар, һүҙ күтәрмәйҙәр.

- Әйҙә, сығып тартып алайыҡ.

- Берәр йотоп сығайыҡ.

Ҡабаланмай ғына тәмәке көйрәтеп кергәс, кәйефтәре ыҡланып, йөҙҙәре яҡтырып китте, бер-береһенә үпкәләшеү юҡҡа сыҡты.

- Йә, иптәштәр, идара йорто яныу мәсьәләһен ҡалдырайыҡ та икенсе мәсьәләгә күсәйек, - тине Илгиз, барыһы ла урындарына ултырғас.

Сәмиҙең күҙҙәре маңлайына һикерҙе.

- Һеҙ нимә, егеттәр, бөгөн мине ҡайтармаҫҡа уйлайһығыҙмы әллә? Ысынлап ғәйеп тағырға, ахыры, ниәтегеҙ. Ҡайҙан керҙем.

- Быныһы әле һөйләшкәндең туранан-тура дауамы булмаһа ла, бер-береһе менән бәйләнеше бар, - Һеҙ, ғәйепләнеүсе Сәмиғулла Боҫҡонов, идара йорто янғандан һуң күп тә үтмәй, колхоз рәйесен йөрөтөүҙе ташлап, тракторға күсәһегеҙ. Яҙғыһын Азаматтың атаһы Фәррәх ағай менән понтон күперҙәр алып ҡайтып килгәндә...

- Давай, егеттәр, был ваҡиғаға ҡағылмайыҡ, ә?

- Юҡ, ҡағылабыҙ! - Азамат быны ҡысҡырып тигәндәй үк әйтте.

- Ай-һай, тәки соҡсонаһығыҙ, ә, - Сәми, сит ихатаға килеп кергән мал шикелле, күҙҙәрен алартып, ҡотолоу юлын эҙләне. Йөҙө үҙгәрҙе, яңаҡ мускулдары тартышты, шырт баҫҡан осло эйәген түшенә ышҡып алды, бармаҡтарын шартлатып Илгизгә йәнә бер күтәрелеп тәрән көрһөндө лә ултырғысына сумыбыраҡ ултырҙы.

- Бер заман Фәррәх ағайҙың "Беларусь"ы ҡыйғалап китә лә, юлдың ситенә үк килеп, түбәнгә янтая башлай. Ярҙам итеү урынына һин Фәррәх ағайҙы ташлап ҡайтып китәһең. Артабан ни булғанын бер кем дә белмәй. Нишләгәндер ул, ни рәүешле үлгәндер - барыһы ла бөгөнгө төн кеүек ҡараңғы ҡала. Ә бит бергә сығаһығыҙ, бергә тейәйһегеҙ шул понтондарҙы, бергә ҡайтырға юлланаһығыҙ. Алыҫ араға йөрөгәндә йәки ауыр йөк тарттырғанда шофер, тракторист халҡы гел бергәрәк йөрөргә тырыша - яҙылмаған закон был.

- Давай, теймәгеҙ быға! Иҫләүе ауыр миңә, - Сәми ялбарыулы ҡарашын Илгизгә ҡаҙаны. Юҡ, уйынан кире ҡайтырлыҡ түгел ине "суд рәйесе". Быға ҡәҙәр яҡлашҡылап ултырған Билалы ла тышҡа ҡараған көйө ауыҙын йомған. Был малайҙарҙан изгелек көтөрлөк түгел. Сәми көсләп булһа ла йылмайырға маташты, рюмканы ҡулына алды, әммә эсмәне. - Беҙ быныһы тураһында килешмәнек. Ҡайтам. Һуң хәҙер.

Ҡапыл ҡалҡынып, уның ҡаршыһына Азамат килеп баҫты.

- Ҡайтмайһың, ултыр! Нисек булған - барыһын да һөйләп бир!

- Егеттәр, һеҙ нимә? - Сәми тәүҙә Азаматҡа, унан Илгизгә ҡараны.

- Был инде уйын түгел, һеҙ уйынды ысынға әйләндерергә тырышаһығыҙ, минән булмаған ғәйептәрем өсөн үс алырға теләйһегеҙ.

- Ысынлап та, уйынды судҡа әйләндермәйек. Һорау алыу бит был. Мин һеҙҙе тәүҙүк иҫкәрттем, - тине Билал, ниһайәт, ҡарашын тыштан алып. Ниңәлер ҡулын һелтәп ҡуйҙы, шыма, матур йөҙөнә ҡурҡыу ятты.

✓ ***Атайыңды яратманым. Етәкселәр уны ғына күтәрҙе, уны ғына президиумға ултыртты, уға ғына орден бирҙеләр, ул ғына Мәскәүгә күргәҙмәгә барҙы. Эйе, егәрле ине, ә бит мин дә хөрт эшләмәнем, минең дә маҡталғы килде.***



Өйҙә тынлыҡ урынлашты. Барыһы ла бер юлы тиғәндәй тәмәке тоҡандырҙы - был юлы тышҡа сығып торманылар.

- Нимә һөйләргә лә белмәйем, - тине байтаҡ ҡына үҙ төтөнөнә күмелеп ултырған Сәми. - Ул ер тар, "Беларусь" менән тартып сығарырлыҡ түгел, гусеницалы трактор кәрәк. Маташһаҡ, ул соҡор икебеҙҙе лә һөйрәп төшөрәсәк ине. Мин ҡайтып трактор алып киләм, ҡуҙғалмай ғына ултырып тор, тинем. Тынғыһыҙ кеше ине бит Фәррәх ағай, көтә буламы, яңғыҙ ҡыланған инде. Ауып ишеге менән ҡыҫҡан да ҡуйған. Мин әйләнеп килгәндә үлгәйне...

- Ишеге менән ҡыҫҡас, һин түгел, "Беларусь"ы гәйепле инде, тимәк.

- Улай тимәйем. Әҙ генә сабыр итһә, бер ни ҙә булмаҫ ине, һөйрәп сығарыр инек.

- Бала-саға шикелле ниңә ҡабаланып ҡайтып китергә? Ике ир берәй фекергә килә алмай инегеҙме ни? Атайым ҡайтма тиһә лә, ҡайтҡанһыңдыр әле, - Азаматтың ирендәре дерелдәне.

Сәми тамам ҡурҡыуға төштө: быларҙы әрләргә кереп, үҙе баһырға ҡалды түгелме һуң? Ҡалды ғына тин, эште судҡа тапшырыуҙары ла бар. Ана, укып ҡына бөтәйем, һәммәгеҙҙе ултыртам, тип янай бит. Ышан уға, теге аяҡһыҙ инвалидты яклап һуғып ебәргән малай ише генә итмәҫ, бар ауылдан һорау алһа алыр, осона сыҡмай туктамаҫ. Үҙендә лә баш бар, ҡайҙан уратып килтерә - көлкөлө генә ваҡиғанан башланы ла Фәррәх ағайҙың үлеменә килтереп ялғаны. Былар алдан һөйләшеп ҡуйманылармы икән? Хәйер, уның бында керерен ҡайҙан белһендәр? Эйе, йөрәккә ҡулды ҡуйып әйтһән, ысынлап та, Сәмиҙең гәйебе бар ҙа һымаҡ шул. Тарттырып ҡараһа, бәлки, сығарыр ҙа ине. Әллә нимәнеңә ҡабаланған булды, этләнәһе килмәне, ярҙам иткеһе килмәне, дөрөҫөн әйткәндә. Данлы механизатор Фәррәхтең шул хәлгә ҡалыуына, тракторһын осороуына ҡыуанды хатта.

- Әйтеп торам бит, Азамат, трактор алып килергә ҡайттым тип. Кем белгән уның ауырын? Белгән булһам, ҡайтмаҫ инем. Кем батмай ҙа, кем ҡыйғаламай? Төндәр буйы ыҙаланған бар. Бер улмы? Юҡҡа бәйләнәһегеҙ, мин төртөп ауҙарған, әйтерһең...

Ул һүҙен дә ослап бөтөр алманы, Азамат тегенең түшенән матҡып алды ла һелкетергә кереште.

- Һин генә гәйепле атайымдың үлеменә! Һин... һатлыҡ йән, хәшәрәт...

Билал менән Илгиз быларҙы айырайыҡ тигәнсе, Азамат Сәмиҙе бар көсөнә этеп тә ебәрҙе. Тегеһе, ҡулдары менән һауаны бутай-бутай, тәнтерәкләп, арты менән ишек төбөнә барып төштө.

- Азамат! - тип ҡысҡырҙы Илгиз. - Ҡағылма! - Ул Сәми янына барып, тегенең терһәктәренән тотоп аяғына баҫтырырға маташты. - Ғәфү ит, Сәмиғулла ағай.

Сәми бөгәрләнеп ятты-ятты ла яй ғына ҡалҡынды, йөҙөн һыпып, башын тотто, унан өндәшмәй генә урынына барып ултырҙы.

- Беләһегеҙме, бының өсөн мин үҙегеҙҙе судҡа бирә алам бит. Гәйепһеҙ кешене туҡмау был. Билал, һин шаһит. Ҡулығыҙҙы ла, телегеҙҙе лә тиҙ ҡыҫҡартырҙар, - бөршәйеп кенә ултырған Сәми күҙ алдында турая, йөҙөнә, ҡыланышына ҡыйыулыҡ инә башланы, тауышы шәбәйгәндән-шәбәйҙе. - Күрә алмайым мин һеҙҙе, күрә алмайым. Үҙегеҙҙе әллә кемгә ҡуйып йөрөгән булаһығыҙ, һеҙ Алланың ҡашҡа тәкәләре түгел, укып йөрөһәгеҙ ҙә. Бер аяғығыҙ тиреҫтән сыҡмаған, икенсеһе асфальтҡа баҫмаған. - Сәми йәлп иттереп Азаматҡа боролдо. - Атайыңды яратманым. Етәкселәр уны ғына күтәрҙе, уны ғына президиумға ултыртты, уға ғына орден бирҙеләр, депутат иттеләр, ул ғына Мәскәүгә күргәҙмәгә барҙы. Эйе, егәрле ине, ә бит мин дә хөрт эшләмәнем, минең дә маҡталғы килде. - Сәми ҡабалана-ҡабалана теҙҙе лә теҙҙе, әйтерһең, кемдер артынан ҡыуа сыҡҡан - килеп етер ҙә һөйләүенән туктатыр. Ауыҙынан төкөрөктәре сәселде, күҙҙәренән ут һәм асыу бөркөлдө. - Әммә мин үлтермәнем атайыңды, ундайҙар үҙҙәрен-үҙҙәре үлтерә. Ул саҡ үлмәһә, икенсе ваҡыт, икенсе ерҙә һәләк булыр ине.

Сәми һөйләүенән туктаны. Туктаны ла егеттәрҙең һәр береһенә алмашлап ҡарап сыҡты. Сыбырткы шартлатҡандағы һымаҡ һелтәнгән ҡулдары һәленеп төштө, ҡурҡыныс салышайған йөҙө яйлап үҙ рәүешенә ҡайтты. Башы йәнә түшенә һәленеп, яурындары тартылды - ул нисектер бәләкәйләнеп, тиреҫ араһында көн иткән ҡарышлауыҡҡа оҡшап бөршәйеп ҡалды.

- Ярар, Сәмиғулла Боҫҡонов, суд шуның менән тамам, - тине Илгиз, тегенең сәйер ҡиәфәтенә ҡарап. - Хөкөм сығарҙыҡ, берберебеҙ менән аңлаштыҡ, белмәгән байтаҡ әйбер белдек.

Сәми аяҡтарына гер аҫҡандай ауыр ҡуҙғалып, ишеккә йүнәлде. Хәҙер уның юлына төшөүсе, туҡта, уйнап бөтәйек, тип туктатыусы булманы.

- Суд тамам, - Сәмиҙең инрәү ҡатыш тамаҡ төбөнән сыҡҡан һаңғырау тауышы өй эсендә ҡалды. - Юҡ, бөтмәне әле, - тигәне ишеккә ҡыҫылды. Артабан ни әйткәндер, Илгиз дә, Азамат та, Билал да аңғарманы - өсөһө лә ҡаҡҡан бағаналай аптырашып, яй ғына ябылған ишеккә төбәлеп, иҙән уртаһында ҡатып ҡалды.

Тышта таң һыҙыла башлағайны...

Эттәре өрөүгә тышҡа сыҡһа, ҡапҡанан әсәһе кереп килә. Төҫө ҡасҡан, хәрәкәттәре хафалы. Апаһы Тәскирә йәки иңы тыуған балаһы менән берәй хәл булғанмы әллә тип, йөрәге жыу итеп китте Илгиздең, шуға һорай һалды:

- Апаймдар ни хәлдә?

- Арыуҙар, - тип яуапланы әсәһе, өрөүҙән туктап үҙен уратып һикергеләгән этте ҡул хәрәкәттәре менән ҡыуып. - Сәмиғулла котельныйҙа аҫылынған тейҙәһә. Атайың шунда ҡалды. Халыҡ йыйылған, - тине ул әске бер ҡалтыраныу менән. - Аһ-аһ, ниңә улайтты икән? Ҡатыны менән татыу ғына йәшәгән һымаҡ ине. Үәт донъя...

- Уйындан уймаҡ сығарҙыҡ. Әйттем мин һеҙгә, - бынының ҡайһы аралалыр янына сығып баҫҡан Билал һүҙе булды...

**(Аҙағы. Башы 27-28-се һандарҙа).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

*Рита ФӘТҠУЛЛИНА*

# ВАҠЫТ ХАҠЫН ХӘҘЕР АҢЛАР ВАҠЫТ...



### Үҙемә юл

Тыуғанымдан алып үҙ-үҙемә
Китеп барам
Кескәй аҙым менән.
Мин үҙемә шундай яҡынмын да,
Шундай алыҫмын да
Никтер гелән.

Хыялыма - ҡул һуҙымы ара,
Йә ул йондоҙ - уйҙар етмәҫ күктә.
Һин бойһоноп уға ынтылғанда,
Ул алдыңа сүгәләгән күптән.

Һин диңгеҙҙе яулайым тип йәнә,
Баш көлләләй уға сумған саҡта,
Тертләп китеп ҡабат уянаһың -
Күләүеккә батҡаныңды аңлап.

Һин бөйөк тә... күҙәнәк тә кеүек...
Был донъяның ҡанундары өсөн.
Был йәшәүме... көн күреүме әллә
Түгеп кемдәргәлер хәләл көсөң.

Хәләл көсөң. Хәләл ваҡытыңды.
Ваҡыт хаҡын хәҙер аңлар ваҡыт.
Ҡәҙер белгәндәргә ҡәҙерле ит.
Әй Илаһым, һөйөү менән балҡыт
Йәндәремде,
Һәр мәлемде,
Донъямды
Бөтөн итеп ҡабул ҡылыр өсөн,
Үҙ-үҙемә барған юлымда
кескәй генә һуҡмаҡты
табыр өсөн,
таныр өсөн.

### Һөйөү һүҙе

Һине эҙләп мин күктәргә мендем,
Болот күлдәгемдә донъя гиҙҙем,
Ҡитғаларҙы күҙләп,
Һине эҙләп.
Нурлы бәхет - офоҡ балҡышында -
Беренсе үҡ ҡанат ҡағышында
Мин бит һине тапҡанымды һиҙҙем.
Ҡауышҡанда күктә йәндәш-болот,
Һөйөү ҡояшынан яна офоҡ.

Һине эҙләп мин диңгеҙгә сумдым,
Тәңкә күлдәгемдә танырһың тип,
Алтын балыҡ булып юллап йөҙһәм,
Һөйөү ҡармағыма ҡабырһың тип.
Ә бит һиҙҙем ярһыу хистәреңдән
Тулҡын булып ҡосоп алырыңды,
Һөйөү Аллаһының ҡөҙрәтенән
Ҡармағыңа үҙем ҡабырымды
Барыбер һиҙҙем.
Диңгеҙ тулҡындары шаулашҡан саҡ -
Ғашиҡ йәндәр һүҙһеҙ аңлашҡан саҡ.

Һәр күҙәнәк Күктә,
Һәр күҙәнәк Һыуҙа,
Һәр күҙәнәк Ерҙә
Һөйөү нуры менән тукылғанда,
Яралмыштан алып һөйөү һүҙе
Доға итеп йәнгә уҡылғанда,
Һине эҙләп мин Ер буйлап киттем,
Барыбер ҡаршы сығырыңды көттөм.
Мин бит һиҙҙем.
Таптым, таптым һине!

Етәкләшеп кенә яр буйынан
Һуҙһеҙ килгән мәлгенәбеҙ серле:
Офоҡтарҙа ҡояш булып янам,
Диңгеҙ тулҡынында ҡанат ҡағам!
Һиҙәһеңме?..

* * *

Күҙҙәренә баҡҡас, танsocket
Алһыуланып атҡан таңымды,
Сабый ғына бөрөлә тыуып килгән япраҡ еҫен.
Дөп-дөп итеп йөрәген ҡаҡҡанында -
Ҡар аҫтынан йылмайған умырзая -
Тәүге хисем.

Бик һаҡ ҡына ҡағылам битенә,
Аяғандай ҡар сәскәнең бәбәктәрен.
Яҙ төҫөндә ине тойғо...
Һәм дә йәшлек,
Өркөтмәйем тиеп өндәшмәнем.

...Бик һаҡ ҡына ҡағылам һырҙарына -
Һейкөмләрәк иткән ваҡыт биҙәгенә.
Мин танының һине, йәшлек,
иҫәр йәшлек,
Әйт әле, нисә йәш һуң әле һиңә?..

### Мөхит

Һулаған һауаң.
Түлләнер уйың.
Байыуҙан рухың
Тартылыр буйың.

Терәшер иң дә.
Атылыр уҡ та.
Күңел күгенә
Тағылыр суҡ та.

Ул ниндәй - һин дә.
Көҙгә - тормошоң.
Ҡояшлы йөҙ йә
Болот - булмышың.

Үҫеш йә яныу,
Тәгәрәү аҫҡа.
Түбәгә етеү
Йә башың - ташҡа.

Был һинең һайлау.
Һин дә бит -
мөхит.
Ҡабул ит.
Иңеңдә ҡуйыр,
Уйҙарың һыйыр
Ерҙе яҡты ит.

### Ауыл йорто

Тәҙрәһендә ҡояш тынып ҡалған,
Түрҙәрендә шымған моңһоу ҡот.
Ҡайғыһынан ергә нығыраҡ һеңгән
Хужаларҙан яҙған етем йорт.

Башын аҫҡа эйгән мөрйәһе лә
Төтөн, аш еҫтәрен һағыныр.
Өҫтәлдәге ҡалаҡ-тәрилкәгә
Кем ҡулдары хәҙер ҡағылыр.

Өй эсенә тулған өнһеҙлектә
Тынып ҡалған таныш тауыштар.
Ҡараштар ҙа тынған.
Туктап ҡалған
Киләсәккә барған яҙмыштар.

Һуҙҙар тынған.
Ваҡыт үҙе тынған.
Ә бит булған,
Тормош булған йорттоң эсендә.
Донъя барған гөрләп,
Балалар үҫкән,
Бәхет татып иртә-кисен дә.

Барыһын да кеше кисергәндер,
Һағыш-ғазабына күнгәндер.
Күңел балҡыштары ошо йорттоң
Бүрәнәһенә лә һеңгәндер.

Өй алдында анау эскәмйәлә
Һыйынышып ҡына ултырып,
Киске эңерҙә көтөү ҡаршылаған
Һәм оҙатҡан көндө ике һын.

Оҙатҡандыр шулай ғүмерҙәрен
Алыҫ офоҡтарҙың артына.
Ә йорт тора.
Таныш тауыштарҙы,
Таныш ҡараштарҙы һағына.

✓ *Бөгөнгө көндә йәшенән ҡартына тиклем бер минут та бәйләнешһеҙ, интернетһыҙ йәшәй алмай кеүек. Ә ошондай урындарҙа улар тәбиғәткә яҡыная, борсолоуҙарҙан арына, телефонһыҙ ҙа көн итеп була икәнен аңлай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠ ИКМӘК АШАМА

■ Милан милли институты ғалимдары белдереүенсә, аҡ икмәк һәм макарон изделиеларын артыҡ күп ашау ҡатын-ҡыҙҙарҙың организмы өсөн зыянлы. 47 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был продукттар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен 2-3 тапҡыр арттыра. Әммә был үҙенсәлек ир-егеттәргә ҡағылмай, ти ғалимдар. Америка ғалимы Герберт Шельтон раҫлауынса, ике йәше тулмайынса балаларға бөтөнләй аҡ икмәк бирергә ярамай. Дөрөҫөн әйткәндә, эш бында аҡ икмәктә лә түгел. Бойҙайҙан он тарттырғанда уның бөтөн файҙалы элементтары ҡабығында ҡала.

■ Wi-Fi кеше организмына нисек тәьҫир итә? Был һорауға аныҡ ҡына яуап биреп булмаһа ла, уның балаларҙың сәләмәтлегенә зыян итеүен ғалимдар раҫлаған да инде. Тикшеренеүҙәрҙең авторҙары билдәләүенсә, балаларҙың мейеһе сымһыҙ электрон ҡоролмалар бүлеп сығарған радиацияға тиҙерәк бирешә. Тыуып өлгөрмәгән балаға ла уларҙың тәьҫире ҙур, шуға ла табиптар ауырлы ҡатындарға кеҫәләрендә телефон йөрөтөргә кәңәш итмәй.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеү-ҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүен асыҡлаған.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары, 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Балыҡ диетаһы яман шештең ҡайһы бер төрҙәренән дә һаҡлай. Ғалимдар билдәләүенсә, бигерәк тә һыуыҡ диңгеҙ һыуҙарында йөҙгән омега-3 майлы кислоталарына бай майлы балыҡтар файҙалы. Ә бына шәхси кешеләр тарафынан фермаларҙа үрсетелгән балыҡ ашаусыларҙа яман шешкә ҡаршы тороу һәләте түбән, сөнки яһалма аҙыҡ ашап үҫкәнлектән, был балыҡтарҙа омега-6 майлы кислоталар күберәк. Һуңғыларына һөмбаш ғаиләһенә ҡараған балыҡтар инә. Балыҡтың нисек әҙерләнеүе лә мөһим. Мәҫәлән, тоҙло балыҡ үҙенең профилактик үҙенсәлектәрен юғалта, ә ҡыҙҙырылғаны, киреһенсә, яман шеш хәүефен арттыра, сөнки ҡыҙған саҡта аҙыҡта концероген аминдар тупла-на.

ЙҮНСЕЛ ЙҮНЛӘЙ

**Походҡа йөрөргә яратҡан кеше булараҡ, республиканың төрлө төбәгендә булырға тура килде. Тауҙарға күтәрелеү, йылғалар буйлап ағыу, мәмерйәләр эсен байҡау, күлдәр матурлығын күҙәтеү һәм башҡалар - барыһы ла зиһенде аса, күңелгә ял бирә, матурлыҡты күрергә өйрәтә. Төрлө миҙгелдәге сәйәхәттең үҙенә генә хас айырым күркәмлеге бар. Яҙын бар донъяның ҡышҡы йоҡонан уяныуына шаһит булаһың, йәйге сәйәхәт ваҡытында республикабыҙ тәбиғәтенең ҡабатланмаҫ хозурлығын байҡайһың, көҙ миҙгелендәге сәйәхәт төрлө төҫтәргә мансылып ял итеүҙән алған тәьҫораттарҙы тағы ла байыта төшә. Ә ҡышҡы сәйәхәт тәнгә генә түгел, йәнгә яңы һулыш бирә. Быйыл дуҫтар менән ҡышҡы Ирәмәлгә сәйәхәт итеү мөмкилеге булды һәм беҙ был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырманыҡ.**

**Башҡорттар өсөн изге тау Ирәмәлгә ҡышын күтәрелеүҙән алған ыңғай хис-тойғолар әллә күпме ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, әле булһа йөрәктә йәшәй. Сәйәхәтебеҙҙең уң булыуы, матур үтеүе беҙҙе ҡаршы алып, оҙата йөрөүсегә лә бәйле. Ысынлап та, ҡышҡы сәйәхәт өсөн үҙ эшенең оҫтаһы, тауҙы яҡшы белгән, төрлө кешеләр менән һәйбәт мөнәсәбәт урынлаштыра алған ойоштороусының булыуы - уңыштың яртыһы. Ирәмәлгә алып йөрөүсе күп һанлы ойоштороусылар араһында Илфат ФАХРИСЛАМОВ, һис шикһеҙ, тәүге урындарҙың береһен алып тора. Уның менән эшмәкәрлегенең үҙенсәлектәре тураһында һөйләштек.**

# БАЙҺАҠАЛДА ЯЛ ИТЕГЕҘ!



- 2016 йылда ҡатыным менән тәүге тапҡыр Учалы районы Байһаҡал ауылынан Ирәмәлгә күтәрелдек. Әлеге мәлдә юҡҡа сыҡҡан Байһаҡалдың ултырған урыны иҫ киткес матур: алыҫ түгел Ағиҙел башланған урын, Әүәләк һырты күренеп тора, урман һәм тауҙар уратып алған. Тәү күреүҙән оҡшаған урында йәйгеһен килеп йөрөргә тип ер һатып алып, өй күтәрҙек. Йәйҙәрен генә килеп йөрөй торғас, күңелдә был урындың матурлығын башҡаларға ла күрһәтеү теләге уянды. Шулай итеп, туристар ҡабул итә башланыҡ һәм бына 10 йылға яҡын республикабыҙҙан, бөтә Рәсәйҙән, хатта сит илдәрҙән килгән туристарҙы Ирәмәлгә алып йөрөйбөҙ. Йыл әйләнәһенә көн һайын тиерлек минең иртәм Учалы ҡалаһынан туристарҙы барып алыуҙан башлана. Ике яҡҡа юл 140 саҡрым тирәһе, ниндәй миҙгелдә лә ҡуйы урман аша үткән юл түҙемлек, таһыллыҡ талап итә. Мин туристарҙың һаулығы, ғүмере өсөн яуап бирәм, шуға күрә тоғро "дуҫым" УАЗ-ды, халыҡ теләндә "буханка" тип аталған машинамдың, һәр саҡ төҙөк, таҙа булыуына ҙур иғтибар бирәм.

Ауылда электр уты (мин өйҙө махсус ҡоролмалар ярҙамында яҡтыртам), бәйләнеш юҡ. Бындай шарттар тәүҙә туристарҙы хәүефкә һала, унан уларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуа, һуңынан инде бөтөнләй өйрәнеп алып, рәхәтләнеп ял итәләр. Бөгөнгө көндә йәшенән ҡартына тиклем бер минут та бәйләнешһеҙ, интернетһыҙ йәшәй алмай кеүек. Ә ошондай урындарҙа улар тәбиғәткә яҡыная, борсолоуҙарҙан арына, "быҙ-быҙ" тип туҡтауһыҙ тауыш биреп торған телефонһыҙ ҙа көн итеп була икәнен аңлай. Шуға күрә туристарҙың: "Эх, ял бөтә, хәҙер ҡалаға сыҡһаҡ, тағы ла шул телефон һәм башҡа гаджеттарға бәйләнәбеҙ инде", - тиеп үкенес белдереүҙәрен яҡшы аңлайым. Кем нисек кенә инҡар итергә тырышмаһын, беҙ тәбиғәт балалары, унан алыҫайһаҡ та, бөтөнләй айырыла алмайбыҙ. Тәбиғәт ҡуйынындағы бер көн дә беҙгә үҙ асылыбыҙға ҡайтырға ярҙам итә. Бигерәк тә балалар өсөн Байһаҡалда ял итеү донъяны бөтөнләй икенсе яҡтан аса кеүек. Саф һауала йүгереп уйнап, йөҙҙәре асыла, бер-береһе менән рәхәтләнеп аралаша башлайҙар.

Ирәмәлгә сәйәхәт ойоштороусылар, ысынлап та, бихисап. Байһаҡалдан, Төлөктән һәм башҡа яҡтарҙан тауға илтеүсе юлдар бар һәм улар, миҙгелдең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, һәр саҡ туристар менән тулы була. Байһаҡалдан Ирәмәлгә алып йөрөүсе бер мин генә түгел, һуңғы йылдарҙа бында бер-бер артлы өйҙәр ҡалҡа, туристар һаны ла бермә-бер арта бара. Беҙ, туристар менән эшләүселәр, бер-беребеҙҙе конкурент итеп күрмәйбеҙ, киреһенсә, кәрәк булһа, ярҙам итәбеҙ, төрлө мәсьәләләрҙе бергәләп йырып сығабыҙ. Бөгөн миңә ярҙам кәрәк булһа, иртәгә минең ярҙамымдың кемгәлер кәрәге тейеүе бар. Шулай уҡ Ирәмәл дә низағ тыуҙырырға яратҡан, боласыл, уҫал, эгоист кешеләрҙе үҙ итмәй. Әгәр ҙә был өлкәлә эшләргә теләйһең икән, бөтә яҡлап та уйларға, бөтә үҙенсәлектәрҙе лә күҙ уңында тоторға кәрәк.

Миңә туризм өлкәһендә эшләү оҡшай, шуға күрә артабан да эшмәкәрлегемде киңәйтергә иҫәп тотам.

Башҡортостанда туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә хәҙер, беҙҙең гүзәл тәбиғәтле төбәккә килеүселәр һаны ла йылдан-йыл арта. Шуға күрә уларға республикабыҙ буйлап сәйәхәттәр ойоштороуҙы лайыҡлы башҡарырға кәрәк. Һәм шул уҡ ваҡытта беҙҙең алда, йәғни туризм өлкәһендә эшмәкәрлек алып барыусылар алдында торған тәүбурыстарҙың береһе - бындай сәйәхәттәрҙең тәбиғәтебеҙгә зыян килтермәүен тәьмин итеү. Стихиялы рәүештә йөрөгән туристарҙың барыһы ла тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштa, тип әйтеп булмай, сөнки улар артынан сүп-сар ҡала, усаҡтар һүндерелмәй, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһына ла зыян килтерелеүе бар. Ә туризмды үҙенең эшмәкәрлеге итеп һайлағандар бындай хилафлыҡтарҙың булыуына юл ҡуймай. Шуға күрә туризм өлкәһенә дәүләт кимәлендә ярҙам күрһәтеү, был йүнәлеште үҫтереүгә ҙур көс һалыу республикала алып барылған дөрөҫ сәйәсәт ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Күңеленә ятҡан шөғөл һайлаһаң, һиңә бер ҡасан да эшләргә кәрәкмәй", тигән афоризмды һәр кем яҡшы белә. Ысынлап та, бар күңелеңде һалып эшләгәндә генә бөтә эштәр уң була. Илфат Ишнияз улы - нәҡ ошондай бәхетлеләрҙең береһе, сөнки ул үҙ эшен ярата-тып башҡара. Төбәктә туризмдың киң ҡолас алып үҫеүенә уның да ҙур көсө һалына. Тәбиғәтте яратыусы, уның һағында тороусы, йәнле һәм йәмле сәйәхәттәр ойоштороусы Илфат Фәхрисламовҡа эштәрендә уңыштар теләйбеҙ.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

АҠЫЛ - ҠАҘНА

# САҠЫРЫЛҺАҢ, САҠЫРҒАН ЕРГӘ БАР



**Байтаҡ ғәмәл-ғибәҙәттәрҙең тәртибе Ҡөрьән-Кәримдә әйтелмәгән. Уларҙың һәммәһен дә Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм әйтеп йәки эшләп күрһәтеп биргән, сөнки Аллаһы Тәғәлә уға Үҙенең өйрәтмәләрен кешеләргә аңлатып биреү хоҡуғын Үҙе биргән. Үҙен мөъмин-мосолман тип һанаған һәр бер кеше шул әйтеп бирелгән сөннәттәрҙе бер һүҙһеҙ ҡабул итергә тейеш. Әгәр шуларҙы эшләмәһә, Ҡөрьән-Кәримдәге күрһәтмәләрҙе үтәү мөмкин булмаясаҡ.**

Һеҙҙең иғтибарға Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең сөннәттәренән хәҙистәр тәҡдим итәбеҙ. Был хәҙистәрҙе, аңлауы еңел булғанлыҡтан, шул көйө генә бирәбеҙ. Һәммәбеҙгә лә шул хәҙистәрҙә әйтелгән күрһәтмәләр буйынса ғүмер итергә насип итһен! Амин!

♦ Диндең афәте - өс: боҙоҡ фәҡиһ (шәриғәт белгесе), рәхимһеҙ имам (дәүләт башлығы, ҡәбилә рәйесе) һәм наҙан мөжәһит (дин эшендә тырышлыҡ күрһәтеүсе).

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ҠАТЫНЫҢ БАЛА ТАПҠАНДА...

## унық янында бул!

**Мексиканың Юкатан штаты аборигендары араһында беҙгә сәйер һәм көлкөлө булып тойолған бер күренеш күҙәтелә. Әгәр ҙә берәй ирҙең йыш ҡына уҡшып, ҡоҫҡоһо килә башлаһа, ваҡыты-ваҡыты менән эс сәнсеүе сығып, диарея бимазалаһа, был тирә-яҡтағылар өсөн уның ҡатынының йөклө булыуы тураһында билдә икән. Буласаҡ атайҙарҙы хатта тоҙло аҙыҡ тарта башлап, енси ихтыяжы юғалып, улар төрлө хәүефле төштәр күрә башлай икән. Был һис тә ғәжәп түгел: был ҡәүем ирҙәрендә үҙ-үҙҙәрен ҡатындары менән идентификациялау (тиңләү) халәте бына шулай нык үҫешкән.**



Әлбиттә, бындай симптомдар һәр бер ир өсөн хас түгел, бигерәк тә беҙҙең юғары үҫешкән йәмғиәттә. Хәҙерге заман ирҙәре, ҡатындарын нисек кенә яратмаһын, әле бәйән ителгән кисерештәр кимәленә етә алмай. Шулай ҙа уларҙың күптәре өсөн ҡатындарының тәүге тапҡыр ауырға ҡалыуы, буласаҡ үҙгәрештәр тураһында хәбәр итеп, шикшөбһәләр, яңы ҡараштар барлыҡҡа килеү, ғаиләлә роле алмашыныу менән бәйле.

Һуңғы йылдарҙа ғаиләлә атай роле тураһында ҡараштар ярайһы уҡ үҙгәрә, киңәйә бирҙе. Мәҫәлән, ҡатыны бала тапҡан саҡта буласаҡ атайҙың йәнәшендә булыуы йәмғиәттә хуплау тапты. Әлегә ирҙәрҙең күбеһе быға әҙер түгел: уларҙа хатта бала табыу процесында ҡатнашыу ҡурҡыу тойғоһо уята. Ә хәҙер иһә ҡайһы бер ҡатындар бала тапҡанда ирҙәренең ҡатнашыуын мотлаҡ, тип иҫәпләй. Ҡайһы урындарҙа йәш ғаиләләрҙе бала табыуға әҙерләү курстары ойошторолоп, унда ирҙәрҙе ҡатындарына физик һәм психологик ярҙам итеү алымдарына өйрәтәләр. Ҡатын кеше тулғаҡлаған мәлдә уның ире, аҡ халат кейеп алып, акушер-табиптарға ассистент булып, хәлəл ефетенә ярҙамға килә, яңы ғына тыуған сабыйын тәүләп үҙе ҡулдарына ала.

Бына балаһын хирургик юл (кесарево сечение) ярҙамында тыуҙырған бер йәш әсә низәр һөйләй: "Мин бала табыуҙан бигерәк, иремдең үҙ-үҙен тотоуына иҫем китте. Хирург минең ярамды теккән арала баланы палатаға алып киттеләр, ирем дә табиптар артынан эйәрҙе. Ул ике сәғәттән генә минең янына кире килде. Ирем сабыйҙы үҙе ҡойондорған, биләгән, һәм ул ошонон менән шул тиклем ғорурлана, хатта мине лә бала менән нисек мөғәмәлә итергә өйрәтергә әҙер ине".

Ҡатындары бала тапҡанды күреп, ирҙәр быға булмаған кисерештәргә юлыға. Улар һөйләүенсә, яңы тыуған сабый шул тиклем ҡәҙерле һәм яҡын булып китә, зиһенде биләй, башҡа нәмәләр тураһында уйлап та ҡарамайһың. Күңелендә эмоциональ күтәренкелек, ғорурлыҡ биләп, үҙенде әллә кемдәй тояһың икән. Ҡайһы бер тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, бындай атайҙар балаларына тиҙерәк эҫенеп китеп, артабан да улар тураһында ҡайғыртыусан була. Яңы кисерештәр уларҙа ҡатындарына ҡарата ихтирам һәм һөйөү көсөн ҡеүәтләп ебәреп, ир тоғролоғона нигеҙ була. Йәнә, йәш әсә бар иғтибарын, бар наҙын сабыйына йүнәлткәс, ҡайһы бер ирҙәр ҡатындарын үҙҙәренән ситләшкәндәй итеп күрә башлаһа, балаһы тыуғанда бергә булғандар араһында бындай тойғо күҙәтелмәй.

Тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, сабыйҙарын тыуыу менән ҡулдарына алған атайҙар артабан да балаһы менән йышыраҡ уйнарға, уның янында оҙағыраҡҡа ҡалырға тырыша. Был бала өсөн дә һәйбәт. Атайҙары маҡсатлы тәрбиә алып барған ғаиләләрҙә үҫкән балалар физик яҡтан да, аҡыл йәһәтенән дә алдынырах була. Бер ғилми тикшеренеү күрһәтеүенсә, аталары менән йышыраҡ һәм оҙағыраҡ аралашҡан балалар социаль яҡтан әүҙем, башҡаларға ҡарата ярҙамсыл була. Ғәҙәттә, бындай ғаиләләрҙә үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡ осраҡтары һирәгерәк булып, татыулыҡ һәм яҡшы кәйеф хөкөм һөрә. Күрәһең, бала тәрбиәләүҙә беренсе көндән үк әүҙем ҡатнаша башлаған атайҙар шәхесендә байтаҡ ҡына күркәм сифаттар пәйҙә булалыр.

Атай һәм әсәйҙең сабый менән аралашыуында билдәле бер айырымлыҡтар булыуын оноторға ярамай. Әсә балаһын имеҙә-ашата, йыуындыра, биләй, йоҡлата, ә атай кеше сабый менән уйнарға ярата. Атайҙың бала менән уйнауы ла башлыса төрлө хәрәкәттәр менән бәйле: ул баланы әйләндерәтулғандыра, тубыҡтарына ултыртып бәүелтә, өҫкә сөйөп уйната һ.б. Әсә кеше сабыйы менән һәр саҡта ла һағыраҡ була, наҙлай, яғымлы һүҙҙәр менән өндәшә. Был айырманы сабый үҙе лә бик тиҙ һиҙеп ала, күрәһең. Ай ярымлыҡ бәпес тә, үҙе менән уйнарға ятраҡан атаһын күреү менән, уға тартыла башлап, ҡаштарын күтәреп-күтәреп ала: йәнәһе, мин һине күрҙем, әйҙә, мине ҡулыңа ал, уйнайыҡ!

Сәнгелдәктә саҡта уҡ ата менән бала араһында яҡын эмоциональ бәйләнеш барлыҡҡа килһә, ул ғүмергә һаҡланып ҡаласаҡ. Бала үҫеп, бәлиғ булғансы, уның атаһы менән яҡын мөнәсәбәттә булыуы уға ыңғай йоғонто яһай. Бындай балалар аталары менән һәр саҡ ғорурланырға ярата, уларға оҡшарға тырышып, шундай уҡ күркәм сифаттарға эйә була. Ә атай өсөн балаһының яҡшы кеше булып үҫеп, башҡалар араһында кәмхур булмауынан да ҙурыраҡ ҡыуаныс вә шатлыҡ юҡтыр ул.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

♦ Ғилем афәте - өс: уны онотоу, йә ғилем әһеле булмаған кешеләргә шул хаҡта һөйләү һәм уны юғалтыу.

♦ Бәндәләр нисек ултырһа, мин дә шулай ултырырмын, нисек ашаһа, мин дә шулай ашармын.

♦ Монафиҡлыҡ ғәләмәте - өс: һөйләһә - ялғанлай, биргән вәғәҙәһен боҙа һәм аманатҡа хыянат итә.

♦ Саҡырылһағыҙ, саҡырған ергә барығыҙ.

♦ Иң тәүҙә, үҙеңдән башла - саҙаҡаны тәүҙә үҙеңә бир, үҙеңдән артҡанын - ғаиләңә, ғаиләңдән артҡанын - яҡындарыңа, яҡындарыңдан артҡанын шул рәүешле башҡаларға бир.

♦ Һеҙгә һөйөнөс бирәм, үҙегеҙҙән һуңғыларҙы һеҙ ҙә һөйөндөрөгөҙ, кем "Аллаһтан башҡа бүтән тәңре юҡ", тип килә һәм шуға тоғро ҡала, шул йәннәткә инә.

♦ Аллаһы Тәғәлә алдында талаҡ хәләл булһа ла, Ул быға бик нык асыулы.

♦ Килешеүгә бармаған дошманлыҡтағы кешеләргә Аллаһы Тәғәлә бик нык асыулы.

♦ Хәжәттәрен ирештерерлек егәрлелеге булмағандарға хәжәт еткерергә ярҙам итегеҙ. Әгәр кемдер ялҡауҙарҙың хәжәтен солтанға ирештерһә, Аллаһы Тәғәлә шул кешенең аяҡтарын сиратҡа ныҡытып ҡуя.

♦ Эй, Әҙәм балаһы - үҙеңә етерлек әҙерләнгән булһа ла, сиктән сығырлығын эҙләйһең. Эй, Әҙәм балаһы - һиндә аҙына ҡәнәғәтләнеү, күбенән туйыу тигән нәмә юҡ. Эй, Әҙәм балаһы - тәнеңдә сәләмәтлек, күңелеңдә тыныслыҡ, көндәреңдә уҙҙырырлыҡ ризыҡ бар саҡта, донъяһының аҫты-өҫкә килһен!

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Һаҙ ябалағы

**(Болотная сова)**



Ҡарға ҙурлығында, ҡолаҡлы ябалаҡҡа оҡшап тора. Ерәнерәк көрән, "колаҡ"тары ҡыҫҡа, саҡ ҡына беленеп тора, күҙҙәре сағыу һары, уларҙы киң ҡара "битлек" уратып алған.

Тауышланып бармай. Ҡош туйы ваҡытында һаҙ ябалағының "һуу-һуу-уу" йәки "ду-ду-ду" тип ҡысҡырыуын ишетергә мөмкин. Йырынан һуң һауала яй ғына осош яһауы, бер күккә ятыуы, бер ергә яҡынлашыуы мөмкин. Ата ҡоштарҙың ҡайһы берҙәре, осоп барышлай ҡанаттарын елпеүҙән туктап, башы менән ергә "осоуы", шул арала ҡанаттары менән "сәпәкәйләп" алыуы ла ихтимал. Бына шундай ҡыҙыҡ күренешкә тап булған кеше үҙ күҙҙәренә ышанмай ҙа торалыр. Инә һаҙ ябалағы иһә тамаҡ төбө менән "һееү, һееү" тип ҡысҡыра.

Был ҡош бөтөн ерҙә лә бар тиерлек, ул өс материк - Европа, Төньяҡ һәм Көньяҡ Американың ҙур өлөшөн алып тора. Урал алдында һирәк оя ҡороп йәшәй, ә бына Көньяҡ Урал һәм Урал арьяғының дала, урманлы дала райондарында ғәҙәти ҡош. Асыҡ урындарҙы ярата, урмандың да яланлы ерҙәрен, үләнле, һаҙлыҡлы өләштәрен үҙ итә. Ағасҡа түгел, ергә ултыра. Дымлы урындарға өҫтөнлөк бирә, шулай ҙа яҡында һыу сығанағы бар икән, ҡоро далала ла йәшәй.

Оя ҡорасаҡ урынында ҡар ирей башлағанда уҡ күренә, ҡош туйҙары осоро үткәс, парлашып, оя йүнәтә. Һаҙ ябалағы кимереүселәрҙең күплеге йә аҙлығына ҡарап үрсей. Ояһы ерҙә, уны артыҡ йәшермәй ҙә. Ояһына бер нәмә лә түшәмәй. Шулай ҙа һаҙ ябалағының ҡая йырыҡтарында, ташландыҡ йорт-ҡурала, ҡартайып йығылған ағас ҡыуышлыҡтарында ла ояларыу билдәле.

Төрлө хайуандар менән туҡлана. Төп ризығы - ҡыр сыҫҡаны, йомран, тейен һәм башҡа кимереүселәр. Башлыса һауала һунар итә, 10-20 метр бейеклегендә яй ғына осоп йөрөй, хатта һауала бер аҙға ғына туҡтап та ала һәм ҡорбанын эләктерә. Энерҙә һәм төнөн әүҙем, көндөҙ ҙә һунар итә.

Иртә яҙ осоп килә башлай һәм миграция ваҡыты ҡыш башланғанға тиклем һуҙыла. 1962 йылдың сентябрендә биолог В.Г. Ершов Өршәк йылғаһының һыҙлыҡлы бер ерендә һаҙ ябалаҡтары өсөн ят булған күренешкә тап була: унда 40-лап ҡош йыйылған һәм өйрәктәргә оҡшатып парлап һауаға күтәрелә, ҡабаттан ергә ултыра. Был туплаңыу ҡышлау еренә осоу алдынан булғандыр тип фаразлана. 1965 йылдың майында Әбйәлил районы Сыбарғүлдә, 1990 йылдың июлендә Учалының бер һаҙлығында беҙ ҙә һаҙ ябалағының көпә-көндөҙ матур итеп осоуын күҙәттек. Сыҫҡан нык үрсегән йылдарын һаҙ ябалағы ҡышлап та ҡала. Күпселеге Африка, Һиндостанға барып уҡ ҡышлай. Зоопарктарҙа 70-80 йыл йәшәй, ҡырағай тәбиғәттә әлегә 12 йәшкә тиклем ғүмер итеүе билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ ТЫУЫУЫНА - 145 ЙЫЛ



Башҡорт АССР-ның беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 145 йыл тулды. Ул 1880 йылдың 20 июлендә Еҙем-Ҡаран ауылында (хәҙерге Башҡортостандың Ғафури районында) хәлфә ғаиләһендә донъяға килгән.

Абдулғафуров Ғәбделмәжит Нурғәни улы сығышы менән кәлсер-табын ырыуы башҡорттарынан. Башланғыс белемде ауылында алғас, Троицк ҡалаһында Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәһендә уҡый, Ҡаҙандағы "Мөхәммәдиә", Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәләрендә белем ала. Белемгә ынтылышы көслө булған йәш кеше алтын приискыларында, ҡаҙаҡ далаларында, етеш шәкерттәргә ялланып эшләп тә йәшәрлек аҡса таба.

Мәжит Ғафури 1901-1902 йылдарҙа уҡ тәүге шиғырҙарын ижад итә башлай һәм шәкерттәр араһында билдәлелек яулай. Ошо уҡ йылдарҙа "Фәҡирлектә үткән тереклек" тигән тәүге хикәйәһен ижад итә.

Ғөмүмән, әҙиптең ижады күп ҡырлы. Юҡҡа ғына уны башҡорт әҙәбиәте классигы, башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы тип нарыҡламайҙар. Мәжит Ғафуриҙың шиғырҙары, проза әҫәрҙәре, мәҫәлдәре бөгөн дә актуаллеген юғалтмай. Шулай уҡ ул журналистиканы үҫтереүгә күп көс һалған шәхес тә. Тағы ла бер мөһим хеҙмәте - фольклорсы булараҡ, Мәжит Ғафури "Заятүләк менән Һыуһылыу" башҡорт халыҡ эпосын яҙып алып, һаҡлап алып ҡалыусы.

Башватҡыста уның шиғри юлдарында йәшеренгән һүҙҙәрҙе табырға тәҡдим итәбеҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тасимов. Есаул. Моталов. Тәкә. Алтмыш. Бампер. Опал. Рив. Оҫтаһы. Алғыш. Сыҙам. Ювелир. Рәсем. Кireһе. Раса. Әмер. Игеҙ. Ирис. Мәле. Вервье.

**Вертикаль буйынса:** Бураҡаев. Тимерғазин. Шарик. Мәғрип. Идиома. Сос. Скейтбордсы. Мәһәҙиев. Ливер. Ем. Виловатово. Юлбарисов. Тремор. Мулла. Ыршы. Руда.

**28-се һандағы баш ҡатырмаҡ яуаптары:** Темәс; Зәки Вәлиди; китаптар; Миңлеғафур Зәйнетдинов; Даян Мурзин; бал; аҡ; барымта; Янибай Хамматов; 6 метрҙан арыраҡ ташлаһаң, йоморҡа 6 метрҙы ярылмайса үтә.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ҺАҒЫҘАҠ САҠТЫМЫ!



**Йәйге миҙгелдә бал ҡорто, һағыҙаҡ, иңкеш, күгәүен сағыу осраҡтары ла күбәйә тип иҫкәртә Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы хеҙмәткәрҙәре. Был бөжәктәрҙең тешләүе ауыр аллергия тыуҙырыуы ихтимал. Иң ҡурҡынысы, бығa тиклем аллергия күҙәтелмәгәндә лә сираттағы тапҡыр сағылыу кеше ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя.**

Әгәр ҙә сағылған урын һыҙлаһа, ҡыҙарһа, ҡыҫыһа һәм шешеп торһа, һеҙҙә ябай реакция. Әммә тиҙ арала табип ярҙамына мөрәжәғәт итеү кәрәклеген белдергән билдәләрҙә лә хәтер һандығына "биклә̆п" ҡуйығыҙ. Уларға сабыртыуҙың тәнгә таралыуы, биттең, ирендәрҙең, телдең шешеүе, эс тартышыуы, эс китеүе инә. Бөжәктән сағылғас та ошондай билдәләр барлыҡҡа килһә, табипҡа ла тиҙерәк күренергә кәрәк.

- Әгәр ҙә был бөжәктәрҙең сағыуын насар кисергәнегеҙҙе беләһегеҙ икән, махсус медицина браслеты тағып йөрөгөҙ, унда нимәгә аллергия икәне яҙылһын.
- Бал ҡортон, һағыҙаҡты ризыҡҡа, һыуға ҡушып йотоп ебәргән осраҡтар ҙа була, был да хәүефле, сөнки улар тамаҡты сағыуы һәм тамаҡ ныҡ шешеп, тын юлын быуыуы бар.
- Сағылған урынды иғтибарлап ҡарап, ҡаяуҙы алып ташларға һәм яраны һабынлап йыуып, боҙ һалырға кәрәк. Шул саҡта ағыу ныҡ таралып өлгөрмәй һәм тән ныҡ шешмәйәсәк.
- Аллергия билдәләре бар икән, гистаминға ҡаршы дарыу (преднизолон, димедрол, супрастин) бирергә. Таблетка формаһындағы дарыуҙарҙы профилактика өсөн ҡулланыу яҡшы, ә бына етди аллергия осрағында уларҙың ярҙамына өләһ ни өмөт итергә ярамай, ти белгестәр. Ә адреналинды көслө аллергия барлығын белгәндә генә ҡулланырға ярай, сөнки уның тәьҫире оҙайлы түгел һәм артабан зыян күреүсе мотлаҡ табиптар күҙәтеүе аҫтында булырға тейеш.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ЦИКОРИЙ

**Цикорий - күп йыллыҡ үлән, уның тамыры һәм үләне дауалау маҡсатында ҡулланыла. Ул инулин, пектин, күҙәнәклек, витаминдар (А, В, С, Е, К) һәм минералдарға (кальций, магний, калий, тимер һ.б.) бай.**

Цикорийҙың файҙалы үҙенсәлектәре:

- Ҡандағы шәкәрҙе кәметә, диабетиктар өсөн файҙалы.
- Аш һеңдереүҙе яҡшырта, эсәктәрҙә файҙалы микрофлораны арттыра (пребиотик).
- Организмдан шлактарҙы сығара, бауырҙы таҙарта.
- Тынысландыра, нервылар системаһын нығыта, йөрәк эшен яҡшырта.
- Тире, сәс өсөн файҙалы, иммунитетты күтәрә.
- Кофе урынына эсергә мөмкин, сөнки кофеин юҡ.
- Арыу, шешенеү, эс ҡатыу, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарына ҡаршы ярҙам итә.

***Иҫкәртеү.*** Индивидуаль аллергия, ашҡаҙан-эсәк яҙваһы, ҡурылдай астмаһы, веналар киңәйгәндә һаҡ ҡулланырға кәрәк.

Цикорий сәскәһе дарыу маҡсатында ҡулланыла, уның да файҙаһы бар тип иҫәпләнә. Сәскәһенән әҙерләнгән төнәтмәнең быуыны ауыртҡан кешеләргә, нервылар системаһын тынысландырыу, ашҡаҙан-эсәк эшен яҡшыртыу өсөн ҡулланыу осраҡтары бар. Шулай уҡ цикорий экстракты тирене йәшәртә, туҡландыра, ағарта тип иҫәпләнә.

Тик ҡайһы бер сығанаҡтарҙа сәскә атҡан үҫемлектән файҙа юҡ, тип тә әйтелә.

Ләйсән СӘЛИХОВА.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАШҠОРТОСТАН МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

**12-20 июлдә Мәскәүҙең "Зарядье" паркында Рус география йәмғиәтенең VI "Рәсәй мөғжизәләре" фестивале үтте. Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе командаһы унда үҙ майҙансығын асты.**




"Рәсәй мөғжизәләре" тип аталған был фестивалдә бер көндә бөтә ил тураһында мәғлүмәт алырға мөмкин булды. Рәсәйҙең бөтә төбәктәре вәкилдәре бер урынға йыйылды һәм һәр ҡайһыһы туристар өсөн ҡыҙыҡлы булған иҫтәлекле урындар хаҡында ентекле һөйләне. Башҡортостан майҙансығында бай биҙәлешле тирмәгә инергә мөмкин ине. Унда халыҡ оҫталары ижады әйберҙәре: биҙәкле туҡымалар, һуҡма балаҫтар, сигелгән таҫтамалдар, милли биҙәүестәр һәм башҡа әйберҙәр ҡуйылғайны. Килеүселәргә кейеҙ баҫыу, келәмдәр һуғыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре тәҡдим иттеләр. Шулай уҡ милли кейем кейеп ҡарарға, башҡорт халыҡ бейеүе элементтарын өйрәнергә саҡырҙылар.

Ҡыҙыл майҙандан алыҫ түгел урынлашҡан төп сәхнәлә ижади коллективтар халыҡ мотивтарын ишеттерҙе, үҙ төбәктәренең милли инструменттарында уйнап күрһәтте. Ҡурайҙа уйнау алымдары менән Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Илнур Хәйруллин таныштырҙы. Ә Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты вәкилдәре концерты республика тарихы һәм мәҙәниәтендә айырым урын алып торған "7" һаны символикаһы менән һуғарылғайны. "Ете - еребеҙҙең берләшеүе башында торған ете ырыу, ете ҡалҡыулыҡта йәйрәп ятҡан Өфө һәм, ниһайәт, төбәктең төп символы ҡурай тажы ла ете сәскә менән күрһәтелә", - тип аңлатты уның асылын ойоштороусылар.

# РУХЛЫ ЙӘШТӘРЕБЕҘ ҠОРОНДА

**15-18 июлдә Йылайыр районында "Аҫылташ" башҡорт йәштәре форумы үтте. Унда 600-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Өс көн дауамында улар белем биреү программаһын, оҫталыҡ дәрестәрен үҙләштерҙе, милли уйындарҙа, экстремаль ярыштарҙа ҡатнашты.**

Форумдың спикерҙары булып мәҙәниәт һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре, эшҡыуарҙар, ғалимдар, блогерҙар, спортсылар сығыш яһаны. Улар үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Ҡатнашыусылар шулай уҡ "Рәсәй йәштәре. Гранттар" Бөтә Рәсәй йәштәр проекттары конкурсына сығарыу өсөн үҙ идеяларын яҡлай алды. Һөҙөмтәлә 7 еңеүсе үҙ проектын федераль аҡсаға тормошҡа ашырыу мөмкинлегенә эйә булды.

Тиҫтәләгән дискуссия майҙансыҡтарының береһен Республика йәштәр социаль-психологик һәм мәғлүмәт-методик үҙәге командаһы ойошторҙо. Унда форумда ҡатнашыусылар психологтарҙан шәхсән консультациялар алды. Шулай уҡ һәр кем психологик диагностика эшләү, шомланыу, көсөргәнешлек тойғоларын кәметеү, нерваларҙы көйләү йәһәтенән заманса ҡорамалдарҙың мөмкинлектәрен шәхсән һынап ҡараны.

- Мин үҙем сарала ҡатнашыусылар менән стресс, мохтажлыҡ килеп тыуғанда үҙ-үҙеңде көйләү һәм шул рәүешле ҡәҙимге хәлгә ҡайтыу буйынса интерактив лекция үткәрҙем. Шулай уҡ төп ҡиммәттәребеҙ, бөгөнгө йәштәрҙең үҙ алдына ҡуйған маҡсаттары тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ. Лекцияны бик күптәр ыңғай баһаланы. Тимәк, йәштәр өсөн беҙ актуаль теманы күтәреп сыҡтыҡ, тип уйлайым. Үҙебеҙ ойошторған майҙансыҡҡа 250 кешене йәлеп итә алыуыбыҙ ҙа был турала һөйләй, - тине Үҙәк директоры урынбаҫары Искәндәр Мостафин, сара тураһында тәҫьораттары менән уртаҡлашып.

Форум сәхнәһенән "Бүреләр" төркөмө, Тимур Ямалов, Скани, "Париж" кавер-төркөмө сығыш яһаны. Ҡатнашыусыларға үҙ һәләттәрен күрһәтеү мөмкинлеге лә бирелде. "Мин икенсе йыл рәттән "Аҫылташ" форумында сығыш яһайым. Бындағы дөйөм атмосфера, ҡатнашыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуы, уларҙың энергетикаһы һоҡландыра. Йәштәр йырҙарҙы күңел һалып ихлас тыңлай. "Аҫылташ" - рухлы, күңелле һәм файҙалы майҙансыҡ. Башҡортостан йәштәре бында дуҫтар, фекерҙәштәр таба, мәҙәниәтебеҙ менән таныша, тамырҙарын өйрәнә", - ти йырсы Тимур Ямалов.

"Аҫылташ" йәштәр форумы 2017 йылдан алып Башҡортостан Республикаһы Башлығы Грантына уҙғарыла. Сара йәштәрҙе башҡорт мәҙәниәтенә йәлеп итеү, бәйләнештәрҙе нығытыу, йәш лидерҙарҙы берләштереү мөмкинлеген бирә. Быйыл ул "Берҙәмлек өсөн" фестивале сиктәрендә үтте.

Форумды ойоштороусылар: БР Йәштәр сәйәсәте министрлығы, БР Йәштәр яҡташтары берекмәһе, Йылайыр районы хакимиәте, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ойошма, БР Студенттар һәм аспиранттар ассоциацияһы, БР Фән һәм юғары белем буйынса дәүләт комитеты, Республика студенттар советы, Ректорҙар советы, БР "Белем" йәмғиәте, "Тәүгеләр хәрәкәте", БР Мәғариф министрлығы ҡарамағындағы тикшеренеүҙәр үҙәге, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте, Рәсәй география йәмғиәте, Рәсәй тарихи йәмғиәте.

ТЕЛҺӨЙӘР

# БАҠСАБЫҘҘА - ШАФТАЛЫ

**Баҡсала шафталы үҫә. Шафталы сәскәһенең еҫе тирә-яҡҡа таралған, тигәндәрен ишеткәнегеҙ бармы?**

Шафталыны күптәр татып белһә лә, мәғәнәһенә һүҙлекһеҙ төшөнмәүселәр ҙә табылыр. Уны беҙҙә "персик" ти ҙә ҡуялар. Шафталы - көньяҡта үҫкән емеш. Шафталы тәмле лә, файҙалы ла.

**Шаҡта. 1.** "Шаҡта"ның бер мәғәнәһе - "әрпеш". *Мәҫәлән: Шаҡта әҙәм. Шаҡта кейенеп йөрөмә.* **2.** "Алама" тигән һүҙгә лә тура килә "шаҡта". *Ҡалалағы шаҡта йорттар урынына яңылары һалына.*

**Шараҡ.** Был һүҙ ҙә ике мәғәнәгә эйә. **1.** Тәүгеһе - "тура" тигәнгә иш һәм ағас ботағына ҡарата ҡулланыла. *Ҡарағайҙың шараҡ ботағына бәүелсәк эленгән.* **2.** Утын хаҡында һүҙ барғанда "шараҡ" "ярылып барыусан" тигәнде белдерә. *Кипкәнгә күрә, утын шараҡҡа әйләнгән. Шараҡ утынды ярыуы рәхәт.*

**Шалпыҡ.** "Шалпыҡ"тың мәғәнәһе - "һәлпәйгән, һәленеп төшкән". *Шалпыҡ ең. Ағастың шалпыҡ ботағы.*

**Шам.** "Шам" - бик боронғо һүҙ. Матур әҙәбиәттә осраһа, уның "кис" тигәнде белдергәнен иҫтә ҡалдырайыҡ. *Айлы шам етте. Бындай яҡты шамда донъя тағы ла матур күренә.*

**Шулай итеп, шафталынан - тамаҡҡа, оҫта һүҙҙән телебеҙгә тат йоҡһон.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӘЛӘШ АЛҺАҢ... төн ҡыҫҡара

Күпме ҡымыҙ бирһә лә, кәзә бейә булмаҫ, улары ла булып торһа, заман яман булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Төрлө баш күтәреүҙәр, революциялар өсөн яуаплылыҡ халыҡ иңендә түгел, ә хакимдар иңендә икәненә һәр саҡ инандым. Хакимдар ғәҙел, уяу булһа, халыҡ ризаһыҙлығын ваҡытында атҡарылған реформалар менән иҫкәрткән осраҡта баш күтәреүҙәр булмаясаҡ.

**(И. Гете).**

Сәйәсәттәге яңы кеше ике төҫтө - аҡ һәм ҡараны, ҡайһы саҡта аҡ-ҡара һәм ҡыҙыл төҫтө генә белгән рәссамға оҡшаш.

**(Карл Маркс).**

Граждандар һәм эштәр менән закондар түгел, ә үҙен иң аҡыллыһы тип иҫәпләгән буйһоноусылар һәм буйһондороусылар, судтар идара иткән ерҙә ҡайғы хөкөм һөрәсәк.

**(М. Кутузов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юлдан бер йәш егет китеп бара. Ҡараһа - алдында бер тин аҡса ята. "Бер тин дә аҡса - алайым әле быны", - тип уйлай егет һәм аҡсаны эйелеп алып, кеҫәһендәге көшөлөгөнә һалып ҡуя. Артабан атлай. Башында төрлө уйҙар сыуала. "Ошо бер тин урынына мең һум аҡса тапһам, ни эшләр инем икән? Иң тәүҙә атайым менән әсәйемә күп итеп бүләктәр алыр инем, әлбиттә", - тип уйлай егет. Шулай уйлауы була, көшөлөгөнөң ауырайғанын тоя. Түҙмәйенсә, уны асып ҡарай. Баяғы бер тин урынына мең һум аҡса ятыуын күреп, аптырауының сиге булмай. "Ғәжәп бит был! Бер тин аҡса мең һумға әйләнгән..." Артабан атлай егет. "Әгәр ҙә көшөлөгөмдә ун мең һум аҡса ятһа, ни эшләр инем икән? Әлбиттә, һыйыр һатып алып, әсәйем менән атайыма һөт эсерер инем?" - тип уйлап та өлгөрмәй, көшөлөгөнөң тағы ла ауырайғанын тоя егет. Асып ҡараһа, унда ысынлап та ун мең һум аҡса ята! "Ғәжәп хәл! - тип шатлана егет. - Ә бына көшөлөгөмдә йөҙ мең һум булһа, ни эшләр инем икән? Әлбиттә, йорт һатып алыр, өйләнер инем. Әсәйем менән атайым да беҙҙең менән яңы йортта йәшәр ине..." Шулай тип уйлау менән егет көшөлөгөн аса һала һәм унда йөҙ мең һум аҡса ятыуын күреп, шатлығынан һикереп китә. Көшөлөгөн ябып, кеҫәһенә һалып ҡуйғас, егеттең күңелен ҡорт кимерә башлай: "Бәлки, яңы йортҡа әсәйем менән атайымды күсереп тормаҫҡалыр? Улар минең ҡатыныма оҡшамай ҡуйһа? Иҫке йорттарында йәшәһендәр, әйҙә. Ҡарт кешеләргә һыйыр тотоу ҙа мәшәҡәтле булыр, кәзә генә алып бирермен. Ул тиклем күп итеп бүләктәр ҙә алмам, минең үҙемдең өҫ-башты бөтәйтәһе лә бар..." Ошо уйҙарынан һуң егет кеҫәһендәге көшөлөктөң ҡапыл бүҫкәргәнен тоя. Тиҙ генә асып ҡарай - унда бары тик бер тин аҡса ятҡан була..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 июль 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
24 июль 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1391
1 582218 911006 25029